

ғхмүт СІЛғЙМғНОВ

# МӘҢГЕЛЕК ТУҢЛЫҠТАҒЫ ЙЫЛЫЛЫҠ

Әллә йола, әллә мода, һуңғы осорҙа йә унда, йә бында кемуҙарҙан, бер-бер артлы эпос йыллыҡтары үткәрергә тотондолар. 1991 йылда ҡалмыҡтар үҙҙәренең “Жангар“ының 550 йыллығын билдәләгәйне. Шунан һуң башҡа халыҡтар ҙа, айырыуса төркиҙәр, үҙ эпостарының юбилейын хәстәрләй башланы. Әллә ҡайҙа китмәйенсә, үҙем саҡырылғандарын ғына әйтеп сығайым. 1995 йылда республикабыҙҙың Яҙыусылар союзы рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе профессор Нияз Мәжитов менән миңә күләме йәһәтенән донъяла тиңе булмаған ҡырғыҙ эпосы “Манас“тың 1000 йыллығын билдәләгән тантаналарҙа, халыҡ-ара конгреста ҡатнашыу бәхете тейгәйне. 1997 йылда әзриҙәр уғыз төркиҙәренең “Дәдә Ҡорҡот“ тигән яҙма эпик ҡомартҡыһының 1300 йыллығына бағышланған тәүге ғилми конференцияға саҡырғайны. Үкенескә ҡаршы, унда барырға насип булманы. 1999 йылда үзбәктәр “Алпомыш“ эпосының (башҡорттарҙа “Алпамыша менән Барсынһылыу“ исеме менән мәғлүм булған әҫәрҙең) 1000 йыллығын байрам итте. Шул айҡанлы уҙғарылған халыҡ-ара конгреста ла, тантанала ла ҡатнашып, Ташкент, Хорезм, Ургенч, Термез ҡалаларына сәйәхәт ҡылынылғайны. 2000 йылда Саха (Яҡутстан) Республикаһы олонхоның 1250 йыллығын билдәләне. Ул тиклем аныҡлыҡ менән юбилей датаһын нисек асыҡлағандарҙыр, уныһын бер Алла ғына белә, әммә шуныһы ҡыҙыҡ: айырым эпик әҫәрҙең түгел, тотош жанрҙың хасил булыуын билдәләне сахалар.

Олонхо тип сахалар үҙҙәренең героик эпостарын атап йөрөтә. Фән донъяһына был күркәм күренеш А.Ф.Мидлендорф тигән академиктың яҙмалары аша тәүге тапҡыр 1842-1845 йылдарҙа мәғлүм була. Үҙенең төп эше Себер һәм төньяҡ географияһын өйрәнеү булһа ла, был ғалим ундағы аборигендарҙың этнографияһы, мәҙәниәте менән дә ҡыҙыҡһына. Юлайҡан ғына саха эпосы олонхоларҙы ла теркәштерә йөрөй. Ана шулай донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡыларының бик тә үҙенсәлекле бер тармағын йыйыуға нигеҙ һалына. Бөгөнгө көндә саха халҡы донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡылары араһындағы иң мәшһүр эпосты ижад итеүсе тип танылды. Олонхо хаҡында һүҙ сыҡҡанда, ғалимдар уны ҡырғыҙҙың “Манас“ы, Гомерҙың “Илиада“һы, “Одиссея“һы, һиндтарҙың “Махабхарата“һы,

финдарҙың “Калевала“һы менән сағыштырыусандар. Уға иғтибар ҙур. Олонхоны фольклорсылар ғына түгел, тарихсылар ҙа, философтар ҙа, телселәр ҙә, этнопсихологтар ҙа, музыка, хореография белгестәре лә, дин ғалимдары ла, башҡаһы ла өйрәнә.

Бына шул жанрҙың юбилейы айҡанлы, 2000 йылдың 7-8 сентябрендә Саха Республикаһында “Донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡылары контексында олонхо“ тигән темаға халыҡ-ара ғилми конференция булып үтте. ЮНЕСКО-ның Башҡортостан милли комитетының яуаплы сәркәтибе Шәфҡәт Тутаев менән бергәләп шул ғилми ҡоролтайҙа ҡатнашырға миңә лә форсат сыҡҡайны. Башҡортостан ғилми йәмәғәтселегенең инициативаһы менән республикабыҙ етәкселеге 2003 йә 2005 йылды ЮНЕСКО-ның “Башҡорт халыҡ эпосы “Урал батыр“ йылы“ тип иғлан итеүен юллай. Шул мөһим ваҡиғаға әҙерләнгәндә, ҡәрҙәштәрҙең тәжрибәләрен өйрәнеү яҙыҡ булмаç, тим.

### Саха саҡыра

Йәйҙең иң ҡыҙыу бер мәле. Мин эшләгән Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына Якутскиҙан бер ҡосаҡ саҡырыу ҡағыҙы килеп төштө. “Донъя халыҡтарының эпик мираçы контексында олонхо“ тигән халыҡ-ара конференция үткәрелә. Рәхим итегеҙ!“ тиелгәйне унда. Ойоштороу комитеты ҡыш уҡ, беҙгә хат яҙып, тезистар һорап мөрәжәғәт иткәйне. Беҙҙең институт ғалимдары был мөрәжәғәтте хуплап ҡаршы алды. Күптәр кисектермәй доклад тезистарын ебәрҙе. Әле саҡырыу ҡағыҙҙары килеп төшкәс иһә, бер аҙ баҙап ҡалдыҡ. Баҙамаçлыҡ та түгел ине шул. Ҡара иçәп менән иçәпләп ҡараһаҡ, иçебеҙ китте: Өфөнән Мәскәүгә, унан Якутскиға, йәғни бер яҡҡа осоу ғына ла ун мең һумға төшәсәк! Барғас, ҡунаҡханала торорға кәрәк. Уныһы ла быныһы... Ғилми конференцияның үтеү ваҡыты 7-8 сентябрь, тип кенә күрһәтелһә лә, программа бай ғына: сахалар төрлө саралар ойошторорға ниәтләнәләр икән. Ә улар сентябрҙең алтыһында, шаршамбы көндә уҡ башланып, унына тиклем һуҙылырға тейеш икән. Самолеттың конференция башланыуға тура килеп кенә осор-осмаçын иçәпкә алғанда, Якутскиҙа аҙнаға тиклем йәшәргә кәрәк. Ҡунаҡханала бер көн тороуың да әллә күпме сығым талап итәсәк. Унда, Себерҙә, аҡсаны йомарлап тотона торған тарафта, ҡунаҡханала йәшәү хаҡын уйлай башлаһаң – эш харап! Ә ҡайтыу хаҡы? Шуларҙы уйланыҡ-уйланыҡ та, аҡса һорап директорыбыҙ З.Ғ.Ураҡсинға барҙың ни ҙә барманың ни. Институттың әллә нисә бүлеген бер ай аçырарлыҡ аҡсаны ҡайҙан алһын инде ул! Институтыбыҙҙың ауыҙын асһа үпкәһе күренергә тора, — тиештек тә, саҡырыуҙарына рәхмәттәр әйтеп, хат ҡына яҙырбыҙ ҙа, кәрәк тапһалар, конференция материалдарынан төҙөләсәк йыйынтыҡтары өсөн докладтарыбыҙҙың тексын ебәрербеҙ, тип һүҙ ҡуйыштыҡ.

Яҡутстанға китеүҙән мөтли төңөлөп, ҡала шау-шыуынан ҡасып, пландағы ул-был эштәрҙе атҡарырмын тип, баҡсаға ҡастым. Шулай аҙна үтте, ун көн. Бер ҡайтһам, ҡатыным:

– Һине Тутаев Шәфҡәт тигән кеше таптыра. Ҡайҙалығыңды әйткәс, уны нисек табырға, тип һорашып бөттө. Килмәнеме янына? – тип ҡаршы алды.

– ЮНЕСКО-ның Башҡортостандағы милли ойошмаһында яуаплы сәркәтип булып эшләгән егет ул. Күп булһа, “Урал батыр“ эпосы буйынса һөйләшә торған һүҙе булғандыр, 2003 йә 2005 йылды ЮНЕСКО-ның “Урал батыр“ эпосы йылы тип иғлан итеүен юллап йөрөйҙәр ине, – тиһәм, ни ти:

– Юҡ шул. Яҡутстанды һөйләй. Һин уның менән китергә тейеш икәнһең. Бөтә сығымды үҙҙәре ала, — ти.

Бындай һүҙҙе ишеткәс, нисек кире китәһең? Мин тот та Аҡ йортҡа сап. Барһам – Шәфҡәтем юҡ. Мине эҙләп, институт яғына киткән. Министрҙар Кабинетынан шылдым тигәндә генә, бүлек мөдире Буранбай Күсәбаев осраны:

– Әхмәт ағай, – ти, иçәнлек-һаулыҡ һорашҡас, – унда доклад уҡып ҡына ҡайтмағыҙ инде. Эпос юбилейын улар нисегерәк ойошторған, тәжрибәләрен өйрәнегеҙ.

– Бәй, улар юбилейға саҡыралармы ни?

– Эйе, эйе, олонхоларының юбилейы ти. 1250 йыллығын билдәләйҙәр икән.

– Китеү-китмәүҙе аныҡ ҡына белгән юҡ әле. Хәбәр йөрөй-йөрөүен: бөтә сығымды үҙҙәре күтәрәләр тиме? – тигән булам.

– Дөрөҫө шулай. Ойоштороу комитеты рәйесе Е.С.Васильева үҙе шулай тип хәбәр ебәрҙе. Ул бит Саха-Яҡутстан Премьер-министрының урынбаҫары, беҙҙең Хәләф Хәлфетдинович башҡарған вазифа кеүек үк яуаплы вазифа эйәһе. Бушты хәбәр итмәҫ.

Күсәбаевтан фатиха алып, институтыбыҙға килеп етһәм, Шәфҡәтем сығып килә.

– Бына бит! Кемдер Хоҙаның барлығына шикләнә!

Шулай тиешеп күрешеүгә, күн ҡуржынынан әлеге саҡырыуҙы килтереп сығарҙы. Шуныһы үкенесле, беҙҙән ете кеше доклад тезисы ебәреп, йәй башында бөтәһе лә саҡырыу ҡағыҙы алғайны. Әле тик бер генә кешенең сығымдарын күтәрергә булғандар икән. Һуңғы саҡырыуҙа уның кем икәнен дә атап әйткәндәр. Ни хикмәттәндер, шул аталған кеше мин булып сыҡҡанмын.

Шул көндө үк билет йүнләй һалдыҡ. Ә иртәгеһен иртә менән Мәскәүгә осоп та киттек. Шуныһы ҡыҙыҡ: Өфөнән иртәнге һигеҙҙә осоп, ваҡыт ағышынан ҡалышмай, һигеҙҙә Мәскәүгә килеп тә төштөк. Ә теге яғына, киреһенсә, сәғәтте алға күсерә-күсерә барып, Өфөлә саҡта яңы ятыр мал етте тигәндә Яҡутстан ваҡыты менән иртәнге алтыларҙа Себер еренә аяҡ баҫтыҡ. Трап төбөндә көтөп торған кеше күренмәй. Буш хәбәр генә булып ҡуймағайы! Әҙме ни этлек уйлап, ҡылған этлегенән ләззәт алып йәшәүсе бәндәләр. Ойоштороу комитеты исеменән саҡыртты ҡуйҙы!

– Көткән кеше тойолмай. Берәй нәмә итеп Гуманитар тикшеренеү институты тигәндәрен эҙләп ҡарамаһаҡ, – тим юлдашыма, борсолоуымды йәшерергә маташып.

– Юҡ, ағай, – ти Шәфҡәтем оптимисттарса, — көтөргә тейештәр.

Ысынлап та, осоу яланын үтеп, арка аша сыға башлаһаҡ, Хәйбулла яғының үҫәргәндәрен хәтерләткән бер йәш егет эре итеп “Олонхо“ тип яҙылған ҡағыҙ тотоп тора. Туп-тура янына киләбеҙ. Балыҡсы балыҡсыны алыҫтан күрә, тигән кеүек, был да, йөҙөбөҙгә ҡарап, үҙенә ҡәрҙәш ҡәүемдән икәнебеҙҙе тиҙ таныны:

– Башҡортостанданмы?

– Башҡортостандан.

Егетебеҙ ҡулындағы исемлегенә күҙ һалып алды ла, йәнә һорап ҡуйҙы:

– Тутаев менән Сөләймәновмы?

– Эйе, шулай.

– Улайһа, киттек.

Киттек тегегә эйәреп. Арканы сыҡһаҡ, ни күрәбеҙ: ҡала аэропорттан уҡ башлана икән. Ҡала тигәс тә (яҡташтарым үпкәләмәһен), ул тәүҙә Баймаҡты хәтерләтте. Ағас йорттар. Таш йорттары ла тәпәш кенә. Тегендә-бында замана биҙәктәре – транспаранттар, плакаттар, ҙур-ҙур реклама таҡталары. Уйлаған булам: “Манас“тың мең йыллығын байрам иткән ҡырғыҙҙар һымаҡ, былар ҙа олонхоларының 1250 йыллығын ҙурлап үткәрергә булғандар икән“. Әммә, уазикка ултырып, урамдар буйлап елдерә башлағайныҡ, ғәжәп итә ҡуйҙым: бәй, был саҡырыу, плакат, рекламаларҙың береһенең дә олонхо юбилейы менән уртаҡлығы юҡ икән дә. Уларҙың күптәре балаларҙы кәүҙәләндерә. Әммә шуныһы: яҡут сырайлы балалар һыны йышыраҡ күҙгә ташлана. Келт итеп иҫкә төштө: ә беҙҙә? Сағыштырыу былар файҙаһына ине.

Шулай киләбеҙ. Тик “Саха(Яҡут) фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институты“ тигән яҙыу элеүле торған йорттоң ишеге төбөндә генә бер таҡтала саха олонхоһына 1250 йыл тулыуы, шул айҡанлы халыҡ-ара ғилми конференция үткәрелеүе хаҡында һөйләүсе иғланға тартым яҙма эленгән ине. “Бәй, олонхоларын ололап юбилейын иғлан иткәс, ниңә ошо яҙма менән генә сикләнделәр икән инде“, – тип уйлап ҡуйҙым. Ҡырғыҙстанда “Манас“(1995), Үзбәкстанда “Алпомыш“ (1999) эпостарының юбилей тантаналарында ҡатнашҡан кеше башҡаса ни уйлаһын. Минең уйҙарымды һиҙгән кеүек, ҡаршы алған егет:

– Быйылғы йылды Президентыбыҙ “Бала-саға йылы“ тип иғлан иткәйне, – тине.

– Урамдарығыҙ шуға шулай биҙәлгәнме ни? – тим.

– Эйе. Күптән түгел бында шул йыллыҡ иғлан ителеү уңайы менән “Азия

балалары“ тигән спорт ярыштары уҙғарылды. Ҡунаҡтар төрлө тарафтарҙан килде. Ҡала гөрләп торҙо. Шул тиклем шәп үтте. Хатта Мәскәүҙән килгән журналистар, кәмселек эҙләп, ҡара тиргә төштө бахырҙар, Үҙәк СМИ-һына ЧП ғына кәрәк бит инде ул. Бигерәк тә милли республикаларҙа.

Хаҡ һүҙгә ни тиһең инде?

– Шулай-шулай, – тиештек икебеҙ ҙә.

Үҙәктең быларға, быларҙың Үҙәккә мөнәсәбәте беҙҙәге кеүек икәне хаҡындағы тәүге төшөнсәне ана шулай алдыҡ.

## Инан биргән иман

Сәфәр сығыуҙан өмөттө тамам өҙөп, тынысланып, Разливта ҡасып ятҡан Ленин һымаҡ, Өфөнән китеп, ҡағыҙҙарға сумып тыныс ҡына ултырған бер көндө ҡулыма “Ватандаш“ журналының сираттағы һаны килеп юлыҡты. Был журнал ҡулыңа килеп эләкһә, вәссәләм: эш тигәнең онотола. Ни өсөн тигәндә, уның һәр һаны һине энциклопедик мәғлүмәттәр менән байытҡандай була. Әле лә уның шул күңел һәм зиһен арбар ҡөҙрәтенән арына алмай аҡтарып ултырһам, әүәлге фамилияһы буйынса аҙашым булған ғалимға юлыҡтым. Һүҙ 20-сы йылдар башында иленән сителеп, Урта Азияға сығып китеп, унда бер аҙ ғүмер кисергәндең һуңында афған, һинд илдәрен ҡыҙырып, Франция, Германия аша 1925 йылда Төркиә республикаһына килеп, шунда төйәкләнгәс, Фәтхелҡадир Сөләймәнов тигән исем-атын Абдулҡадир Инан тип алмаштырған мәшһүр яҡташыбыҙ хаҡында бара. Журнал уның Себерҙә йәшәгән төрки ҡәрҙәштәребеҙ хаҡында XX быуаттың 30-40-сы йылдарында төрөк баҫмаларында донъя күргән белешмәләрен тәҡдим иткән ине. Туҡта әле, бараһыңмы, бармайһыңмы, һине саҡырған ил хаҡында белеп ҡуйыу ҡамасауламаҫ, Яҡут иле хаҡында ниндәй мәғлүмәт биргән икән? – тип, ҡараһам, бәхетемә күрә, бар икән. “Яҡут төркиҙәре“ тип атала ул белешмә. Башлап 1938 йылда “Чыгыр“ тигән баҫманың (моғайын, гәзит, йә берәй бюллетень булғандыр) мартта сыҡҡан 63-сө һанында баҫылған булған икән. “Булһа ни, иҫкермәй торған мәғлүмәт, төшөнсәләр ҙә була“, – тинем дә бер тынала уҡып та сыҡтым тегене.

Аҙашым иң әүәл Яҡут иленең ҡайҙа, ниндәй климат шарттарында урынлашыуы тураһында ҡасандыр георграфия дәрестәрендә алып та, баштан осҡан мәғлүмәттәрҙе яңыртты. “Яҡуттар, – тип яҙған Инан, – Көнсығыш халыҡтары араһында иң билдәле ҡәбиләләрҙән булып, төрки расаһына ҡарай. Былар Себерҙең төньяҡ-көнсығыш өлөшөн, беренсе сиратта, Лена йылғаһының бассейнын биләй һәм шуға ла төрки халыҡтарының иң төньяҡ, иң көнсығыш тармағы булып тора. Был ареал көнбайышта Енисей (Морат Аджи әйтеүенсә, Инә сай – Йылғалар инәһе йәки Инә (әсә) – йылға. – **Ә.С.**), көнсығышта Охот диңгеҙе ярҙарына тиклем барып етә. Бик ҙур йылғаларға һәм тауҙарға бай был илдә яҙ һәм йәй бик һуңлап килә. Һәм йөҙ көн генә дауам итә“ (А.Инан. Яҡут төркиҙәре//Ватандаш. – 2000. – №6. – 180-се б.).

Аҙаҡ, Саха сиренә аяҡ баҫҡас, был мәғлүмәттәр һүҙ ялғауға, яңы белешмәләр алырға ярҙам итте. Яҡуттар үҙ илен йә Саха тип кенә, йә ана шулай Саха сире тип атап йөрөтә. Аңлағанһығыҙҙыр, һуңғыһы беҙҙеңсә төкмә-төк Саха ере тигәнгә тап килә. Ана шул Саха ерендә ҡышҡы һыуыҡтар 60 градусты үтеп киткеләй. Ундағы яңы таныштарым әйтеүенсә, ҡыш көнө балыҡ ҡармаҡлар өсөн, метр ярым ҡалынлығы булып туңған боҙҙо быраулап тишергә тура килә икән. Ә тиштеңме, шул тиклем юрған аҫтында тонсоғорға мәжбүр булған балыҡ үҙенән-үҙе атылып килеп сыға ти. Тик алып ҡына өлгөрөргә, алғас, бер-береһенә йәбешеп туңмаһын өсөн, сәсеп ташларға ғына сослоғоң етһен.

Саха еренә аяҡ баҫҡас та, профессорыбыҙ Жәлил Кейекбаев хәтергә төштө. Беҙ студент саҡта, 60-сы йылдарҙың ҡайһыларында икәнен теүәл генә әйтә алмайым, Жәлил Ғиниәт улы Яҡут дәүләт университетына лекция уҡырға саҡырылды. Ҡыш ине. Беҙ инде мәктәптә башланғыс синыфтарҙа уҡыған саҡта уҡ белә инек: Верхоянск – Якутск тирәһендә был миҙгелдә бәғзе ваҡыт һыуыҡлыҡ шул кимәлгә барып етә, хатта осоп барған еренән туңып, ҡоштар

ҡолап төшә, төкөрә ҡалһаң, ергә төшөп етмәҫ элек үк төкөрөгөң боҙға әүерелә. Нисек кенә ҡайтып етер икән уҡытыусыбыҙ, тип борсолабыҙ. Ҡайтып төшкәс, дәрескә ингәнендә һорашмайынса түҙә алманыҡ:

– Жәлил ағай, нисек йөрөп ҡайттығыҙ? Өшөп туңманығыҙмы?

– Һәй, мырҙалар! Унда ла шул Урал һыуығы һымаҡ икән ул. Үҙебеҙҙәге һыуыҡҡа күнеккән кешегә бер ни ҙә түгел, – тине профессорыбыҙ, ҡалын ҡаштарын йәйрәтеп йылмайып.

– Һуң, унда йыллыҡ температура уртаса алғанда минус ун градустан да түбәнерәк, ә иң һыуыҡ саҡтарҙа алтмыш дүрттән дә түбән була тиҙәр ҙә баһаң?

– Тиһәләр ни. Әйттем бит мин: Урал кешеһенә ундағы һыуыҡ бер ни шайы ла түгел.

– ?..

– Хикмәт ниҙә тиһегеҙҙер инде?

– Эйе, эйе...

– Унда температура беҙҙәгенән түбәнерәк булһа ла, һауа ҡоро. Шуға күрә беҙҙең ишеләр тиҙ күнегә. Унда барырға насип булһа, шул иғтибарығыҙға ташланыр: йорттар, урыҫ әкиәтендәге Баба-Яганың өйөн хәтерләтеп “на курьих ножках“ тора. Шулай тине лә Жәлил ағай, беҙҙең яҡҡа ҡарап эйәген атты. Әммә ғәҙәтенсә: “Әт нисек була ул!“ – тимәне: – “Әт, нисек йәшәүселәр бар!“ – тине. Күрәһең, бер-беребеҙгә ҡарашып алған беҙҙәрҙең йөҙөндә һорау уҡый һалып алды. Һүҙен шулай тип дауам итте: – Унда ер иремәй. Мәңгелек туңлыҡ.

Ысынлап та, Якутскиҙа таш йорттарҙың бөтәһе лә таш таяу өҫтөндә ултыра. Шунан нисек хәтерләмәйһең инде уҡытыусыңды һәм нисек иҫкә төшөрмәйһең уның һүҙҙәрен.

Себерҙең иң ҡырыҫ төбәген төйәк иткән саха ҡәрҙәштәребеҙ иленә килгәс, шуныһы ла мәғлүм булды: һыуыҡ булмаған дәүер бында туҡһан көнләп кенә була икән. Шуға күрә ерҙең мәңге иремәүенә аптырайһы түгел. “Саха сире“ндә мин шуға ла төшөндөм: “Мәңгелек туң ер“ тигәнде мин быға са бер ҡатлыларса ғына аңлағанмын икән. Урам баҙарҙарында уҡ йәшелсә һатып торалар. Магазиндарында ла яңы йәшелсә бар.

– Быларҙы ҡайҙан килтерәләр? – тигәс,

– Бәй, ҡала яны совхоздарынан, – тиҙәр һатыусылар. Көтөлмәгән яуапҡа мин аптыра ла кит. Баҡтиһәң, бында үлән дә үҫә. Ҡышҡылыҡҡа бесән дә әҙерләйҙәр. Йәшелсә, картуф та сәсәләр икән. Климат шарттары нисек кенә ҡырыҫ булмаһын, урындағы халыҡ үҙенүҙе аҙыҡ менән тәьмин итеү өсөн ниҙәр генә эшләмәй тимәксемен.

– Беҙҙең Якутск ерҙе һуғарып эшкәртеү буйынса Себерҙәге иң ҙур районда ята. Был тирәлә иген дә сәсеп ҡыртлашалар. Тик ер тар, – тиҙәр сахалар.

– Ер тар? Европаның көнбайышы аяҡ-ҡулы теймәй һыймалы Саха ерендәме?

– Эйе, — тиҙәр былар. Һәм шундай аңлатма бирәләр: – Республика биләмәһенең күп ере әҙәм үткеһеҙ күл дә, урман да тау. Якутскиҙы ғына алып ҡарайыҡ. Ул ҡарамаҡҡа шул тиклем уңай урында һалынған. Уң яҡтан киң даръя булып йырҙарҙа, легендаларҙа данланған Лена ағып ята. Ҡала үҙе шулай уҡ дан-шөһрәт ҡаҙанған Туймаада үҙәненә йәйрәгән. Тирә-яҡта урман. Ҡала һыҙатынан ситкә сыҡмай ғына, күлдәрҙә ҡойонорға була. Теләһәң, шунда балыҡ тот, әммә үҙән үтә лә тигеҙ, иңкеү ер тапмаҫһың. Шул арҡала ҡала ултырған урын да, тирә-яҡ та һаҙамытҡа әйләнә лә ҡуя. Яҙын Лена ярҙарынан ашып, былай ҙа еүеш ерҙе тағы ла ебетә.

Шул һыу баҫыу бәләһе ҡалаға элекке урынында ла тынғылыҡ бирмәгән. Урыҫтар Саха ерен баҫып алғас, Петр Бекетов тигән йөҙ башы үҙенең яугирҙәре менән Лена острогын төҙөй. Ул хәҙерге Якутскиҙан етмеш саҡырым түбәндә Ленаның уң ярындағы үҙәндә төҙөлгән. Әммә яҙҙарын Лена ярҙарынан ашып хәүеф һала башлағас, острогты үргә, тынысыраҡ урынға, күсерергә тура килә. Якутскиға ана шулай нигеҙ һалынған тиҙәр.

*“Яҡут“* тигән атаманы 1630-1680 йылдарҙа илде баҫып алған урыҫтар ҡушыуы, был илдә йәшәүсе урындағы халыҡтың үҙен *“саха“* тип йөрөтөүе хаҡында күптән хәбәрдар булһам да, был этнонимдарҙың тарихынан мәғлүмәтем

юҡ ине. Тәбиғи, әле уҡып ултырған мәҡәләнән тәүҙә ошо мәсьәләгә ҡағылышлы юлдарҙы таба һалырға тырыштым.

Урыҫтар *"яҡут"* этнонимын тота килеп бирмәгән икән шул. "Ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, – ти Инан, – был һүҙ ысынбарлыкта *"сахут"* булырға мөмкин. "Ут" монголса күплек ялғауын аңлата. *"Саха"* һүҙен иһә берәүҙәр *"яҡа"* һүҙенән яһалған тип иҫәпләһә, икенселәре Йәнәсәй баштарында йәшәүсе *сағай* төркиҙәре менән бәйләһә, өсөнсөләре (немец ғалимы Гутшмидт, урыҫ Аристов, мәҫәлән) боронғо *искет-саҡаларға(скифтарға)* алып барып тоташтыра икән". Мәҡәләһенән аңлашылыуынса, Абдулҡадир Инан тәүге ике ҡарашҡа ҡарағанда һуңғыһын хуп күргән. Быға уның: "Һәр хәлдә, *"саха"* һүҙе беҙгә *боронғо саҡаларҙы* хәтерләтә", – тип әйтеүе дәлил(курсивтар минеке. – **Ә.С.**).

Булған шундай заман. Был сахалар ниндәй заттан икән, тип баш ватҡан күп аҡыл эйәләре. Тел, этнология һәм тарих өлкәһендәге тикшеренеүҙәр ахырҙа уларҙың төрки ҡәүеменән икәнен иҫбатларға форсат биргән. Әйткәндәй, Ҡытайҙың боронғо яҙмаларында уларҙың *Со* иленән булған бабалары хаҡында мәғлүмәттәр һаҡланған. Шул мәғлүмәттәр араһында телгә алынған бер мифологик легенда сахаларҙың килеп сығышын, асылда, бүре-әсәгә алып барып тоташтыра. Яҡташабыҙ Абдулҡадир Инан геуаһлауынса, ул яҙмала шул турала әйтелә. Йәнәһе лә, төркиҙәрҙең бабалары һундарҙан төньякта ятҡан Со иленән булған. Шул бабаларҙың ҡайһыһыныңдыр ейәндәренән берәү бүҙҡорттан (йәғни күк бүренән) тыуа була. (Минең уйымса, эйе, шулай *күк бүренән*, сөнки бүҙ менән һоро бер үк төҫ түгел. Мәҫәлән, Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо эргәһендәге ике йондоҙҙоң ағырағын башҡорт мифы Буҙат йәки Аҡбуҙат тип, һарырағын Һарат тип атай. Ә беҙҙең ваҡытлы матбуғат һаман да буҙҡортто "һоро бүре" тип яҙа. Әйткәндәй, халыҡта ундай атама юҡ: башҡорт "һоро турғай", "һоро бүре", тимәй, "буҙ турғай", "күк бүре", ти.

Был легенданың башҡорт фольклоры хәтерендә һаҡланған мотивтар менән ауаздашлығы иғтибарҙы тарта. Мифологик легенда раҫлауынса,башҡорттоң үҫәргән ырыуындағы бер ҡәүем дә бүреәсәнән тыуған балаларҙан йәйелеп киткән. Белгән бар, белмәгән бар. Шул легенданың бер вариантының тулы тексын тәҡдим итәм: "Беҙҙең ауылдар (бында исеменә "бүре" һүҙе ҡушылған ауылдар күҙ уңында тотола. — **Ә.С.**) ҡайҙан килеп сыҡҡан? Беҙҙең тоҡом шундай, йәғни ырыу — бүреләр ырыуы. Ни өсөн шулай?

Беҙ элек( дөрөҫөрәге, электән. — **Ә.С.**) үҫәргән булғанбыҙ. Атай-бабайҙар күсеп-ҡунып йөрөгәндә бер инә бүре осраған. Бер һунарсы быны атайым тиһә, бүре телгә килеп әйткән: "Атма мине! Ҡойроғомдан тотоп, ергә һуҡ," — тигән. Һуҡһа — теге бик матур ҡыҙға әйләнгән. Һунарсы быны алып ҡайтҡан да уның менән тора башлаған. Үҫәргәндәр быға риза булмаған. Егет менән ҡыҙҙы ҡыуып ебәргән. Шунан ни былар ситкә китеп, балалары тыуып, үҙе бер ғаилә булып, ҙур бер ил ҡороп ебәргән.

Әсәләре бүренән тыуғас, был затты бүреләр тип йөрөтә башлағандар. Ырыуҙы башлап ебәргән әлеге һунарсыны Баш бүре тип атағандар. Бына беҙ шул Баш бүре тоҡомонанбыҙ" (1961 йылда Ырымбур өлкәһе Гай районы Наҙарғол(Башбүре) ауылы Төлкөбаев Сабирҙан(1898) Кирәй Мәргән яҙып алған//FA, ф.3, оп.21/60. - 241-се б.; БХИ:РЛ. - Өфө, 1982. - 49-сы текст).

Шул уҡ "бүреләр" этнонимын тормошсан итеберәк, әммә уйҙырмаға нигеҙләнеп аңлатҡан бер риүәйәт тә бар. Унда "бүре-әсә" мотивының эҙе лә, еҫе лә юҡ. Әммә тегеһе менән йәнәш уныһын да теркәп үтмәксемен. Ни өсөн тигәндә, артабан уға ла һүҙ ҡағыласаҡ: "Элек был яҡҡа Ҡазандан бер сауҙагәр килгән. Ситса-тауар биреп,төрлө йәнлек тиреһе алып йөрөгән. Шунан әлеге беҙҙең төбәккә килһә, бер ҡартҡа тап була.

— Бабай, йәнлек тиреһе бармы?

— Тотһам, булыр, — ти ҡарт.

Шулай ҙа шулай — һөйләшеп китәләр. Шул арала ҡарт малайҙарын ебәрә һунарға.

Уның биш улы була. Малайҙар биш бүре алып килә. Бирәләр быға. Ситса-

тауарын апҡалалар.Ҡараһалар, теге сауҙагәр быларҙы алдаған имеш. Һөйләшелгәндән яртылаш кәм итеп биргән. Был биш малай, тегенең артынан сабып барып, килеп баҫалар ҙа бүре тиреләрен кире тартып алалар. Сауҙагәр: “Әҙәм балаһы түгел икән былар, бүреләр икән!“ — ти. Шунан таралған ул бүреләр тоҡомо. Йәмғеһе биш ауыл.Беҙ ҙә шуға керәбеҙ (1961 йылда Ырымбур өлкәһенең Гай районы Наҙарғол(Башбүре) ауылында Рамазанов Ғарифтан Кирәй Мәргән яҙып алған//ҒА,ф.З.оп.21/6. - 240-сы б.;БХИ:РЛ. - 51- се текст).

Ә хәҙер күк бүренән тыуған әлеге Со ҡәүеме егете хаҡындағы легендаға йәнә бер күҙ һалайыҡ. Башҡорт мифологияһы күҙлегенән ҡарағанда, унда йәнә бер мотив беҙҙең иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалмаҫ. Теге Со егете (ошо урында, сос егет, тип әйтке килә. Сөнки тыумышы менән генә түгел, булмышы һәм булдыҡлылығы менән дә беҙҙең ише ҡәҙимге әҙәми заттан айырылып торған) бер түгел, ике кәләш алған. Ике кәләш алыу, әле береһен нисек ҡәнәғәтләндереп, уның менән нисек тороу тураһында баш ватыусылар өсөн ни тиклем генә ғәжәп күренеш тойолмаһын, үҙебеҙҙең этнографиябыҙҙан мәғлүм ливерат йолаһы һәм шул йоланы яңынан тергеҙеүҙе көҫәгән ҡайһы бер замандаштарыбыҙҙың тәкдимдәре хаҡында хәбәрдар булыусылар өсөн һис кенә лә шаҡ ҡатырғыс хәл булып тойолмай. Хикмәт унда ла түгел. Хикмәт — кемде кәләш итеүҙә. Һәр хәлдә, Со егетенең бер кәләше – Күк илаһының(моғайын да, Күк тәңреһенең) ҡыҙы, икенсеһе Ер илаһынан (бәлки, Ер тәңреһенән йә Ер-һыу һыуҙан) тыуған ҡыҙ була.

Был мәғлүмәт шуныһы менән ҡиммәт. Ул, берҙән, йәнә бер тапҡыр тотош халыҡтың *башҡорт* тигән уртаҡ этнонимын һәм шулай уҡ ошо оло ҡәүемдең *бүреләр* тигән араһының килеп сығышын бүре образына алып барып ялғаусы легендаларҙың осраҡлы тыумауын раҫлай. Ошо ғына факттан да бабаларыбыҙҙың үҙ-үҙҙәрен дөйөм төркилектән айырмауы аңлашыла. Икенсе яҡтан, аҫыл затҡа түл йәйергә мөмкинлек биргән теге аҫыл егеттең тәңре нәҫеле менән никах бәйләнешенә инеүе “Урал батыр“ эпосын хәтерләргә мәжбүр итә. Урал батыр ҙа тәңреләр пантеоны менән эш итеп, иң юғары тәңренең, Самрау атлы тәңренең ҡатыны Ҡояштан тыуған Һомайҙы, тимәк, илаһи затлы ҡыҙҙы, кәләш итә.

Ә Ҡытайҙың боронғо яҙмаһы теркәгән легендала телгә алынған Ер Тәңреһе ҡыҙы иһә “Урал батыр“ эпосындағы Ҡатил батша ҡыҙының образын иҫкә төшөрә. Быны менән генә сикләнмәй, шулай уҡ ер ҡыҙы итеп күрһәтелгән өсөнсө ҡыҙҙы, Гөлстанды ла, хәтерләтә биреп ҡуя.

Теге Ҡытай яҙмаһында телгә алынған егет илаһи затлы ҡыҙҙарҙы нисегерәк кәләш иткәндер, уныһы беҙгә мәлғүм түгел. “Урал батыр“ эпосында иһә, Урал батыр Ҡатилдың ҡыҙын да, Гөлстанды ла, совет власы дәүерендәгесәрәк әйткәндә, “хеҙмәтсәндәрҙең күпдин-күп үтенесе буйынса“ кәләш итә. Хәтерегеҙгә генә төшөрәм: Ҡатил батшаның тауҙай үгеҙен дә, уныһынан яманыраҡ, “Тәне йөнтәҫ айыуҙай, үҙҙәре ҙур дейеүҙәй“, бер табандан ынтылған дүрт бәһлеүәнен дә еңеп, береһен батшаға, ҡалғандарын уның ярандары өҫтөнә олаҡтырып, Урал уларҙың барыһын да он-талҡанға ҡалдыра. Тотҡондарҙы азат итеп, илгә ирек килтерә. Ҡыҫҡаһы, Урал батыр Ҡатил илендә тулыһынса революцион түңкәрелеш яһаған (бәлки былдай интерпретацияға Бөйөк Октябрь йоғонто яһағандыр. Уныһын бер Алла белә лә, бер Буранғол белгән). Культур (йәки культлаштырылған) ҡаһарман кимәленә күтәреп һүрәтләнгән эпос геройын халыҡ бына шулай йәмғиәтте үҙгәртеп ҡормалы ҡеүәткә эйә булған баһадир итеп күҙ алдына килтергән. Әммә, халыҡтың *батырлыҡ* тигән эстетик идеалы буйынса, бындай “титул“ға өлгәшеүсе кеше, ҡеүәтле ҡара көс, рухи ҡеүәт, мөһабәт һын эйәһе булып, шул сифат һәм мөмкинлектәрҙе ил мәнфәғәтенә сарыф итә белеүҙән тыш, бер мөһим актты ла атҡарырға тейеш. Героик эпостың( шулай уҡ батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең) төп ҡаһарманы ахырҙа мотлаҡ никахҡа инә, унан зат ҡала йә шулай буласағына финалда ишара яһала. Шуға күрә Урал батырға ла ил ҡарттарының:

Егет тә егет икәнһең,
Егет, батыр икәнһең;

Йөрәгеңә таянып,
Беләгеңде һыҙғанып,
Беҙҙәрҙәйҙе ҡыҙғанып,
Килгән егет икәнһең;
Батша асыуын ҡуптарған,
Һиңә ҡаршы өскөргән,
Шу айҡанлы беҙҙәрҙе
Шатлы азат иттергән[1] –
Батша ҡыҙы булды бит,
Ул сәбәпсе булды бит;
Һине һөйөп шаулашты,
Атаһы мән даулашты.
Батша ҡыҙын ал, егет,
Бергә ғүмер ит, егет, —

тип, ялынып-ялбарып мөрәжәғәт итеүе һис кенә лә осраҡлы түгелдер.

Ил батырының ил үтенесен үтәмәй хәле юҡ.

Барыһы ла димләшкәс,
Урал алмаҡ булған, ти,
Ҡыҙҙы алып туй яһап,
Бер аҙ тормаҡ булған, ти.
Бер нисә көн булған һуң,
Ҡыҙҙың туйы уҙған һуң,
Урал тағы киткән, ти...

Урал батыр теләһә — егеткә, теләһә — әллә ниндәй йән эйәләренә әүерелә белгән юха затлы Зәрҡүмдең атаһы Ҡәһҡәһәне еңгәндән һуң ирек алған халыҡ та:

Тәңре бирмәс ярҙамды
Беҙгә, егет, атҡарҙың.
Инде, егет, нишләйек,
Ниндәй бүләк бирәйек? —

тип, уға ни алып, ни бирергә лә белмәй торғанда, Урал батыр баҫалҡы тыйнаҡлыҡ менән: “Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй“, — тип, изгелек ҡылыу — ил батыры өсөн фарыз эш икәнен аңлатырға теләп, былай ти:

Ил батыры шул булыр –
Кеше һөйәр ир булыр.
Һеҙҙең шатлыҡ – минең шатлыҡ,
Минең шатлыҡ – һеҙҙеке.

Шулай тип ҡараһа ла, өҙмәй ҙә ҡуймай, был батшалыҡта ла уны кейәү итә һалырға тырышалар. Бәхеттәренән, йыланға ҡаршы яу асҡан ҡыйыу Алғыр батырҙың дуҫы Гөлстан тигән гүзәл ҡыҙ әлеге яуыз Ҡәһҡәһә ҡоллоғонан азат ителгән булған. Шул ҡыҙҙы барыһы ла “димләшеп Уралға бирмәк булғандар“. Урал “Әзрәҡәне еңгәнсе, туйҙы туҡтатмаҡ булған“ – файҙаһы теймәгән: айвайына ҡуймай, уға Гөлстанды кәләш итеп биргәндәр.

Хәҙер шундай һорау тыуырға мөмкин: “Ни өсөн Ҡатил илендә лә, Ҡәһҡәһә илендә лә, теләү-теләмәүе менән дә иҫәпләшеп тормаҫтан, Уралды кейәү итә һалырға ашығалар? Егет оло батырлыҡ ҡылғанға ғынамы?“ Эйе. Әлбиттә, үҙен батыр итеп, юҡ, батырҙарҙың да батыры итеп күрһәткәнгә. Ә бит батырҙар батыры Уралдың был илгә юлайҡан ғына һуғылып, сәфәрен дауам итәсәге көн кеүек асыҡ булғанын белә тороп ныҡышалар уны кейәү итергә. Етмәһә, кем-кем — ил ҡарттары. Тимәк, күпте күргән, күпте кисергән, күпте белгән кешеләр ныҡыша. Тимәк, эш, форсаты сыҡҡанда, батырҙар батыры менән ҡанҡәрҙәшлеккә инеп ҡалырға теләү тойғоһон кисереүҙә генә түгел. Ә ниҙә булыр икән быны сере? Шул һорау хаҡында уйланғанда, Абдулҡадир Инан тигән ҡушамат алған фамилиялаш аҙашымдың йәнә бер хеҙмәте хәтергә төштө.

Бик боронғо дәүерҙәрҙә күп кенә ҡәүемдәрҙә *“түл алыу“* йолаһы ғәмәлдә булған икән. Инандың яҙмаһында һаналғандары ғына ла байтаҡ: был йола боронғо Римдә, ғәрәптәрҙә, абхаздарҙа, Урта Азияла, Себерҙә күҙәтелгән булған. Ғалим *“Уҡйанус“* тигән боронғо бер яҙманан шундай өҙөк тә килтерә: “Яһилиәт (мәжүси, ҡырағай) дәүерендәге никах төрҙәренең береһе шулай ине: ҡатыны күремдән ҡотолоп та өлгөрмәй, ире уға: “Бар, фәлән-фәлән менән мөнәсәбәткә инеп кил“, — тиер ине. Ошо көндән һуң, ҡатыны ауырға ҡалмай тороп, ире уға яҡын бармай, йөклө икәне беленә башлағас ҡына, дәрт инһә, янына барыр ине. Түл алыу ғәҙәте яҡшы нәҫел алыу өсөн атҡарыла (тәржемәлә — эшләнә. — **Ә.С.**) торғайны. Тәбиғи, орлоҡ ҡаһарман, юғары дәрәжәле кешеләрҙән һоралыр ине. Был күренеш *истибағ никахы* тип йөрөтөлдө“ (минең курсив. — **Ә.С.**).

Абдулҡадир Инан, “түл алыу“ йолаһының борон сахаларға ла ят булмауын иҫкәртеп, шулай тигән: “Яҡуттарҙың үҙ ҡатындарының башҡа берәүһе менән мөнәсәбәткә инеп тапҡан йәки ситтән

[1]Шатлы азат иттергән – “тотҡондан ҡотҡарып, ҡыуандырған“ мәғәнәһендә.

алып ҡайтҡан балаларын үҙ балаһы кеүек ҡабул итеүе лә “түл алыу“ хәләл һаналған осорҙан тороп ҡалған күренеш булырға тейеш“. Саха сирендә саҡта был турала минең үҙемә лә сахаларҙың үҙ ауыҙҙарынан ишетергә насип булды.

Күрәһең, хәҙерге әхлаҡҡа һыйып бөтмәгән “түл алыу“ йолаһы “Урал батыр“ эпосы ижад ителгән замандарҙа, Инан әйтмешләй, хәләл йола иҫәпләнгән. Шуға күрә лә ҡобайырҙы ижад итеүселәр ирке менән, Урал батыр, үҙ теләгенән тыш, бары “хеҙмәтсәндәрҙең күпдин-күп үтенестәре буйынса ғына“, тегендә лә, бында ла кәләш ала. Ала ла... ары китә, ала ла... ары китә... Ҡатил батшаның ҡыҙын кәләш итеүе лә, Гөлстан менән никахҡа инеүе лә, Инан телгә алған яҙмала әйтелгәненсә, “яҡшы нәҫел алыу өсөн“, “ҡаһарман, юғары дәрәжәләге кешеләрҙән“ түл алыу йолаһын сағылдырыуы шуның менән дә раҫлана. Кәләштәре: “Ниңә китәһең?“ – тип, йә: “Минең ирем ҡайҙа китте икән?“ – тип, яу һалмай, дау күтәрмәй, сарбайлап, эҙләргә лә сыҡмай. Тора ла ҡала, тора ла ҡала.

Әле әйтелгәнде Ҡәһҡәһә илендә Урал батырҙы кейәү булырға өгөтләүсе ил ҡарттарының һүҙе лә ҡеүәтләй. Батырҙы кейәү итеүҙәренең маҡсатын бына нисек аңлата улар:

Ил батыры – батырҙан,
Батыр ирҙән, тыуыр у;
Атанан күреп, яу асып,
Ил эсендә үҫәр у.
Батырҙан батыр тыуғанда,
Атаһындай булғанда,
Бер быуын тип һанаған
Илдә ғөмөр итер у.
Ундай батыр аҙ булыр.
Булһа ла, яңғыҙ һан булыр у,
Һиңә тиңдәш булыр у,
Батырға әсә булыр у.

Йәғни ил ҡарттары Урал атлы батыр егеткә батырҙан – батыр, матурҙан матур тыуыуын, шуға күрә лә батыр менән матур ҡауышырға тейешлеген иҫбатлайҙар. Гөлстандың, матур булыу өҫтөнә, батыр ҡыҙ булыуына бушҡа ғына баҫым яһалмай. Уныһы ла, иш янына ҡуш булып, әле әйтелгән фекерҙе йөпләй. Ана шул фәлсәфә төшөндөрөлгәндән һуң ғына, был илдә, батырҙың үҙенә ҡарағанда, уның түле ҡиммәт иҫәпләнеүенә (йәғни батырҙың ата йортонда уҡ үҙ алдына ҡуйған маҡсатын юллап ары китеүенә берәү ҙә ҡаршы түгел икәненә) төшөнгәндән һуң ғына, “Урал тыңлаған, Гөлстанды алған ти, бер ҙур туй ҡылған ти, бергә ҡунаҡ булған ти“.

Ярай ҙа килешкән Урал батыр. Юҡһа, ҡоллоҡтан ҡотҡарыусы батыр тип ҡарап тормаҫтар ине, түлен бирмәгәне өсөн тип, берәй төрлө язаға, язаға булмаһа, ҡазаға юлыҡтырыуҙары ла ихтимал ине. Сөнки йола — йола инде. Ул яҙылмаған, әммә заманында, хәҙерге ҡайһы бер эшлекһеҙ закондарҙан айырмалы рәүештә, ҡәтғи күҙәтелер, үтәлерe фарыз закон хисабында булған. Был ҡағиҙә түл алыу йолаһына ла ҡағылған, тип уйларға ерлек бар. Ана бит Инан да, нәҡ ошоно раҫларға теләгәндәй, бер риүәйәт теркәгән үҙенең мәҡәләһенә. Риүәйәт тигәс тә, риүәйәттең ниндәйе әле! Тарихи ерлеклеһе! Бөгөн беҙ ҡаҙаҡ тип иҫәпләгән ҡәүемдең ханы Аблайҙың (XVIII б.) ейәне Кенәнсарыны әсиргә алған ҡара-ҡырғыҙҙар, уның янына һылыуҙан һылыу ҡыҙҙарын ебәреп, шуларға ҡыҙыҡтырып, хан затының түлен алып ҡалырға ниәтләйҙәр. Әммә Кенәнсары уларҙы йөрәгенә яҡын юлатмай: тимәк, түлен биреүҙән баш тарта. Шул ҡылығын күтәрә алмай, ҡара-ҡырғыҙҙар уны үлтерә. Тимәк, түл биреү-бирмәү – ғүмер менән уйнауға бәрәбәр. Улай ғына ла түгел, иленең дошманы алдына теҙ сүгеү-сүкмәү, үҙ иленең ватансыһы булып ҡалыу-ҡалмау тигән төшөнсәләрҙе лә үҙ эсенә алған саҡтары булған уның.

Шуны әйтмәксемен. Ихтимал, әлеге саха легендаһындағы күк бүре нәҫеленән булған егеттең илаһи затлы ҡыҙҙы кәләш итеп алыуында ла, бәлки, берәй версия буйынса, түл алыу йолаһы сағылған булғандыр. Тик легенданың былдай интерпретацияға ҡоролған версияһы булғанмы, юҡмы, булһа, һаҡланып ҡалғанмы, юҡмы — беҙгә мәлғүм түгел.

### Тәүге танышыу

Шуныһы йәтеш булды — конференция Гуманитар фәндәр ғилми-тикшеренеү институтында була икән. Беҙҙе шуның ҡырында ғына ултырған биш ҡат-

лы ятаҡханаға урынлаштырҙылар. Подъезға инеү менән танауға тәмле аш еҫе килеп бәрелде.

– Һо, ашау – байҙан, үлем – хоҙайҙан, тигән кеүек була икән. Үҙ телемдә әйтелгән ошо һүҙҙәремде аңлағандай, оҙатып килеүсебеҙ:

– Һеҙгә талон бирерҙәр, ошо ашханала туҡланып йөрөрһөгөҙ, – тине.

Исеме генә ятаҡхана. Ундай-бындай ҡунаҡханаларың ары торһон. Бүлмәләре, коридорҙары киң. Ҡайҙа ҡарама – бөхтәлек, йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡ.

– Был – хореография училищеһы ятағы. Һәр саҡ таҙалыҡ булырға тейеш. Президентыбыҙ патронажындағы уҡыу йорто, ятаҡ та уныҡы, – тип ҡаршы алдылар беҙҙе вахтерҙар, алдан уҡ киҫәтеп, иҫкәртеп ҡуйырға теләгәндәй.

– Аңлашылды, – тиһең инде бындай саҡта, бүтәнсә ни тиһең.

"Төшкө аштан һуң институт янына йыйылырға", тигәйнеләр. Беҙ йыуынып, ҡапҡылаштырҙыҡ та шунда ашыҡтыҡ.

Беҙ килеүгә байтаҡ халыҡ йыйылған ине. Араларында таныштар ҙа бар икән. Ап-аҡ булып сосайып торған ҡырғыҙ ҡалпағы кейгәне Имел Молдабаев инде ул, моғайын. Нисә күрмә аҡ тирмәне хәтерләткән ҡалпағы башында булыр, тип уйлап та өлгөрмәнем, былай ҙа яҫы битен табаҡтай йәйрәтеп, "Аҡ тирмә" үҙе үк минең яҡҡа килә башланы. Ысынлап та, шул Молдабаев ине. Һөнәре буйынса этнограф булған был ҡырғыҙ профессоры менән ошондай ҡоролтайҙарҙа бишенсегә осрашыуым. 1992 йылда буғай, Ҡазанға китеп барышлай, институтыбыҙҙың мин эшләгән фольклор һәм сәнғәт бүлегенә һуғылғайны ул. Шунда һүҙ эйәрә һүҙ китеп:

– Беҙҙә лә ҡырғыҙҙар бар, – тигәйнем.

– Ҡайҙа? – ти һалғайны яңы танышым.

– Ҡырғыҙ тигән ырыу, аралар(аймаҡтар) бар. Ер-һыу исемдәре араһында ла "ҡырғыҙ" компоненты осрай, – тип, картанан күрһәтеп, әҙәбиәт тә әйткеләгәйнем. "Манас" эпосының мең йыллығына тура килтереп сығарған монографияһында шул мәғлүмәттәрҙе киңәйтә биреп, тотош бер параграф биргән ине.

1997 йылда Анкарала осрашып, уның менән танышлыҡты яңыртҡайныҡ. 1999 йылда үзбәктәр "Алпомыш" эпосының мең йыллығын билдәләгәндә Ташкент, Ургенч, Хорезм, Термез ҡалаларын бергәләп гиҙгәйнек Имел дуҫ менән.

– Әссәләмәғәләйкүм, Әхмәт-әкә!

– Вәғәләйкүмәссәләм, Имел-бей! – тиешеп, күрешеп, төрөктәрсә, яңаҡтарҙы алмаш-тилмәш яңаҡтарыбыҙға тигеҙешеп алдыҡ.

– Һо, Әхмәт Мөхәмәтвәлиевич! Здравствуйте, дорогой!

Аңғармай ҙа торам. Быныһы Яҡут дәүләт университеты профессоры Василий Васильевич Илларионов булып сыҡты. Уның менән 1999 йылдың ноябрендә Бишкекта үткән халыҡ-ара ғилми конференцияла танышып, ЮНЕСКО ҡурсаулығындағы "Донъя халыҡтары эпосы үҙәге"н ойоштороуҙа ҡатнашҡайныҡ. Ошо ойошманы төҙөү тураһындағы төп документҡа Башҡортостан Республикаһы исеменән ҡул ҡуйыу бәхете минең өлөшкә төшкәйне, ул иһә үҙенең яҡташы Саха (Яҡут) Республикаһының Дәүләт йыйылышы – Ил түмән депутаты, Вәкилдәр палатаһының фән, белем биреү һәм һаулыҡ һаҡлау комитеты рәйесе А.Н.Жирков тигән иптәш менән тауыш биргәйне. Тәү тапҡыр күрешһәк тә, күптәнге таныш булып сыҡҡайны был профессор. Дөрөҫөрәге, шулай икәнебеҙҙе ул үҙе хәтеремә төшөргәйне:

– О! Вы Сулейманов Ахмет Мухаметвалиевич? Дорогой, вы ведь мне очень хорошо знакомы...

– Как? – мин әйтәм. – Когда мы встречались?

Баҡтиһәң, эш былай булған имеш. Филология фәндәре докторлығына диссертация яҡларға йыйынған сағында Василий Васильевич беҙҙең институтҡа ла авторефератын ебәргән булған икән. Мин шуға бик киң итеп ыңғай баһалама яҙып ебәргән булғанмын. Фән донъяһындағы яҙылмаған закон буйынса, авторы кем булыуына ҡарамаҫтан, уға баһалама яҙыу – изге эш атҡарыу тип баһалана. Эш урынында бындай хеҙмәттең бәҫе юҡ, тип тормайһың, юҡ ваҡытыңды бар итеп, яҙаһың. Сөнки үҙең дә шул этапты үткәнһең, һиңә лә кемдер, ике ятып төшөнә бер инмәүенә ҡарамаҫтан, баһалама яҙа, һинең эшеңдең хуплар ерен хуплай, шелтәләр

урынын шелтәләй, тәкдим, теләктәрен дә белдерә. Артынан килгәндәрҙе лә уйлайһың. Улар ҙа ошондай бәйләнеш ебен өҙмәһендәр, шул бәйләнештән кинәнһендәр өсөн, яуапһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышаһың. Ҡайҙан, кемдәрҙән генә килмәй ғалим затына тышлығына "Ҡулъяҙма хоҡуғында" тигән иҫкәрмәкиҫәтеү сәпәлгән быңдай хеҙмәттәр. Ҡайҙа, кемгә генә оҙатмайһың үҙеңдең баһаламаларыңды. Үҙең дә онотоп бөтәһең. Ә һинән изгелек күргәндәр, шөкөр, уны онотмай. Бына был фольклорсы, профессор В.В.Илларионов та ана шундайҙарҙан ине. Ул да, тырнаҡ осондай ғына булһа ла, минең дә ҡыҫылыш арҡаһында филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә эйә булған. Быларҙы мин нимәгә сурытам шулай? Бәғзе берәү, һай-һай, шыта, тип әйтһә әйтер. Уның ихтыярында. Әммә миндә был тойғоноң осмото ла юҡ. Йәш ғалимдарға фәһем өсөн яҙыуым ғына бары. Һәр хәлдә, ят яҡтарға барып сыҡҡанда, энә остоғондай ғына булһа ла, һинең хаҡыңда хәбәрдар кешеңде осратыу – оло табыш ул. Һинән игелек күреп, шуны онотмаусыңдың һине табыуы иһә – бәхеткә бәрәбәр. Шундай саҡта башта ят ерҙә үҙеңде ҡарурман төпкөлөнә килеп юлыҡҡандай тойған һин компас менән карта тапҡандай булаһың.

Уны-быны һорашып, Башҡортостан, Өфө хәлдәрен белешеп, Илларионовым икенсе һүҙгә күстем генә тигәндә, тәбәнәк кенә, әммә мыкты кәүҙәле бер ир килеп баҫты яныбыҙға. Ҡарап тороуға уны һис кенә лә яҡуттан айырырлыҡ түгел. Әммә ҡуңыр йөҙө уның ҡояш нуры нығыраҡ ҡыҙҙырған, эҫе дала еле уйнап торған яҡтан икәнен өнһөҙ генә һөйләп торғандай ине. Һәм шулай булып сыҡты ла. Ул үҙен:

– Оконов Борис Босхомджиевич,- Калмыкия, – тип таныштырҙы. – Һеҙ Башҡортостанданмы ни? Өфөнән, значит?

– Эйе, эйе, беҙ Өфөнән, Башҡортостандан, – тине Тутаев.

– Значит, из родины Мухтара Сагитова?

– Да, да.

– Хороший был мужик. Жаль, что рано ушел...

Баҡтиһәң, күренекле башҡорт фольклорсыһы, районташым Мөхтәр ағай Сәғитов Элистала ҡалмыҡ эпосы "Жангар"ға бағышланған бер конференцияға барғанында танышҡан икән уның менән. Унан һуң егерме йылдан ашыу ваҡыт үткән, ә кеше һаман хәтерҙә. Улай ғына ла түгел, иленең исеме менән ассоциациялаша ете ят кеше өсөн. Был да – әлеге лә баяғы беҙҙең осор өсөн бик тә дефицит булған бер сифаттың, ғалимдың ғалим бәсен баһалай белеүенең тере бер кәүҙәләнеше ул.

Конференция көндәрендә дөйөм ятағыбыҙҙа бүлмәнән бүлмәгә саҡырышып, кес кенә табын ҡороп ултырғанда, Оконов, Молдабаевтар менән был темаға сәғәттәр буйы һөйләштек беҙ. Саха дуҫтарыбыҙ, ҡала ситенә алып сығып, ҡәләм кеүек итеп юнылған бер иш бүрәнәләрҙән үҙҙәренең милли архитектураһы рухында төҙөлгән матур ҡунаҡ йортонда ойошторған табын артында ла әлеге һөйләшеүҙе иҫендә тотҡандай, Оконов дуҫ бөтә ғәм алдында:

– Тарихта төрлө хәлдәр булған, була тора. Рәсәйҙең бойондороҡһоҙлоғон яҡлап, һаҡлап алып ҡалыуҙа төрки халыҡтары менән ҡалмыҡтар ҙа әүҙем ҡатнашыр булған. Миҫалға, башҡорт атлылары менән ҡалмыҡ һыбайлылары 1812 йылғы Ватан һуғышында урыҫ ғәскәрҙәре менән бер рәттән француз яуына ҡаршы һуғыша. Батырлыҡтар күрһәтә, – тине.

Миңә бары:

– Ошо ике халыҡтың батырлығы Кремлдәге Георгий залына уйып яҙылған, – тип өҫтәргә генә ҡалды. Ә инде ҡыҙыҡһыныусыларға шул һуғышта башҡорттарҙың 28 атлы строевой полкы француз һуғышсылары менән турантура яу ҡырында йөҙмә-йөҙ, ҡылысҡа-ҡылыс килеп һуғышыуы, бынан тыш башҡорттоң бик күп тыл полктары булыуы, уларының тегеләрен ҡорал, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, ат, фураж менән хеҙмәтләндереүе, ошо милли ғәскәрҙең барыһын да башҡорт халҡы үҙе тәьмин итеп тороуы хаҡында ҡыҫҡаса белешмә бирергә тура килде (ҡалмыҡтан бер генә полк ҡатнашыуын, әҙәп йөҙөнән, әйтеп торманым, әлбиттә).

Бына бит, олатайҙарыбыҙ ҙа, уларҙың бабалары ҡылған эштәр ҙә үҙебеҙҙең кем икәнде танытыуға булыша.

Олатайҙарыбыҙ, уларҙың бабалары тигәндән, уларҙы тәүге пленар ултырышта ҡунаҡ сифатында ғына түгел, докладсы булараҡ та сығыш яһаған Саха(Яҡутстан) Республикаһы Президенты М.Е.Николаевҡа Башҡортостан исеменән һәм институтҡа үҙебеҙҙең институт исеменән бүләктәр тапшырып, ауыҙ асып тәбрикләү һүҙе әйткәндә, бисмилла урынына телгә алынылды. Үҙ сығышыңа үҙең һылтаныу – егетлек түгел түгеллеген, әммә мин шуны тотошлай килтермәй булдыра алмайым. Классикаға дәғүә итмәй ул: әммә саха дуҫтар, шул иҫәптән уларҙың хөрмәтле Президенты йылы ҡаршылағанға һәм үҙемдең исемемдән түгел, һеҙҙең исемдән, халҡым исеменә, әйтергә теләгәнем өсөн килтерәм. Яҙығы булһа, шелтәгеҙгә күнәм, хуплаһағыҙ, йәнә – хуш. Мин бит һеҙҙең алда иҫәп-хисап бирәм.

“Хөрмәтле Президент! “Донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡылары контексында олонхо“ халыҡ-ара конференцияның хөрмәтле ойошторукулары! Саха иленең башҡалаһына килгән хөрмәтле ҡунаҡтар! Дуҫтар! Башҡортостан делегацияһы Бөйөк милли байрамығыҙ, эпик ҡомартҡығыҙ – олонхо байрамы менән барығыҙҙы ла ысын күңелдән тәбрикләй һәм ошондай оло форум эшендә ҡатнашырға форсат биреүегеҙ өсөн ихлас рәхмәт белдерә!

Ҡәҙерле дуҫтар! Саха(Яҡут) иле менән Башҡортостан географик яҡтан бер-береһенән ер аяғы ер башында ята. Әммә уларҙы бик борондан алып тарихи тамырҙар яҡынайта. Бер тигәс, Саха халҡы менән башҡорт халҡы – ҡәрҙәш ҡәүемдәр. Тел, лөғәт буйынса ғына түгел, рухи яҡтан да ҡәрҙәш улар. Ике тигәнем шул булыр: биләгән биләмәләре буйынса ла беҙҙең боронғо бабаларыбыҙ бер-береһенә яҡын булған. Улар Иртыш, Алтай тарафтарында осраша йөрөгән, аралаша алған, ҡоҙалашыр ҙа булған. Башҡорт халҡы үҙенең милли гимны тип танығаН “Урал“ йырында бына бындай һүҙҙәр бар:

Арал диңгеҙенән Алтайғаса
(Йәки:
Урал тауҙарынан – Иртышҡаса)
Йәйрәп ята башҡорттоң далаһы.
Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп,
Әйҙә, йырла, башҡорттоң балаһы!

Өс тигәнем шул булыр. Тарих яҡшы хәтерләй: Рәсәй тигән империяла азатлыҡ, мөстәҡиллек эстәп башҡорттан да күп яу сапҡан, башҡорттан да күп ҡорбан килтереүсе юҡ. Тарихҡа теркәлгән генәһе лә һикһәнләп ихтилал. Рәсәй батшалығы ихтилалсыларҙы аяу белмәй язалаған. Язанан ҡотолғандарының бихисабын Саха иле тарафтарына һөргөнгә ебәргән. Батшаларға баш бирмәҫ, башҡаларға баш эймәҫ булғандары өсөн мәңгелек туңлыҡҡа ғүмерлек һөргөнгә юлыҡҡан бабаларымды һеҙҙең бабаларығыҙҙың — саха халҡының — ихласлығы, күңел киңлеге йылытҡан. Шул ҡыйыу бабаларыбыҙҙың бөгөнгө вариҫтары исеменән һеҙгә, һеҙҙең йөҙөгөҙҙә барлыҡ саха халҡына, теге мәлдә йәшәгән игелекле һәм изгелекле бабаларығыҙҙың бөгөнгө вариҫтарына, бар күңелебеҙҙән рәхмәтебеҙҙе күндерәбеҙ!

Халыҡтың тарихы, уның милли булмышы, күңел нескәлектәре, фекерләү үҙенсәлеге фольклорында бағланыш таба.

Фольклор бар халыҡта ла бар. Әммә эпос, бигрәк тә уның саха олонхоһы ише үтә милли, үтә үҙенсәлекле, үтә боронғоһо, үтә нәзәкәтлеһе бар халыҡҡа ла тәтемәй. Ошондай ҡомартҡыларын түккеләмәй-сәскеләмәй бөгөнгө көнгәсә ҡәҙерләп һаҡлай алған, шуға күрә башҡалар өлөшөнә ҡалаҡ һалып маташмаған халыҡ – бәхетле һәм аҡ күңелле халыҡ ул. Олонхолары саха-яҡут ҡәрҙәштәребеҙҙе ана шундай бәхетлеләр рәтенә ҡуя.

Эпоста уны ижад иткән, ҡәҙерен белеп һаҡлай алған халыҡтың менталитеты сағыла. Шуға ла уны, көсләшкән, бик-бик теләгән, ныҡ-ныҡ ҡырталашҡан сүрәттә лә, башҡалар үҙенеке итә алмай. Хатта ваҡыт-ваҡыт айырым белгестәр, белекһеҙлектәренә барып, шуның киреһен иҫбатларға маташҡан сүрәттә лә.

Бөгөн милли эпостар баҫма, СМИ аша бүтән халыҡтарҙың да күңелен арбай, зиһенен әсир итә. Эпос, шул иҫәптән саханың олонхоһо ла бөгөн бөтә донъя кешелегенең рухи хазинаһына әүерелә. Олонхоға бағышланған ғилми

ҡоролтайыбыҙҙың да тауышы йыраҡҡа китһен ине!“.

…Институт алдына беҙҙе бушҡа ғына йыймағандар икән шул. Тиҙҙән автобусҡа ултыртып, сахаларҙың бөгөнгө иң күренекле иҫәпләнгән рәссамы Т.А.Степановтың күргәҙмәһенә алып барҙылар. “Евразия союзы“(Якутск, 1998) тигән китаптың авторы Андрей Кривошапкин әйтеүенсә, был ҡылҡәләм оҫтаһы бынан егерме йылдан ашыу элек үк сахаларҙың милли үҙаңын асыу өсөн көрәш башлаған. Ул саҡтарҙы хәтерләп, хәҙер:

– Элек беҙҙә йәмәғәт урындарында саха телендә һөйләшеү тәрбиәһеҙлек тип иҫәпләнә ине, – тиҙәр.

– Хатта үҙ ғаиләндә лә урыҫ телендә генә һөйләшеү – юғары тәрбиәлелек сифаты тип ҡарала ине.

– Бигерәк тә ҡалаларҙа.

– Ҡалала берәй яҡшыраҡ эшкә урынлашам тиһәң, үҙеңде ситтән килгән кеше тип танытырға тейеш була инең.

Степанов үҙенең милләтен уятыу эшенә шундай шарттарҙа тотона һәм, әлбиттә, һәр төрлө аяҡ салыуҙарға, сикләү, эҙәрләүҙәргә дусар ителә. Ниһайәт ул көткән көн тыуа. Күргәҙмә рәссамдың элек әйтергә теләп тә әйтә алмағанын “бар тауышҡа“ әйтергә форсат итеүенә ҡыуанып, ирәйеп китеп, ихлас ижад итергә тотоноуын һөйләй.

Экспозиция менән таныша башлаған та, үҙеңде тарих төпкөлөнә, хатта мифик дәүергә барып юлыҡҡандай тояһың. Рәссам һине берсә Урта донъяның ҡаршылыҡлы ысынбарлығының күҙгә күренмәҫ көстәре менән таныштыра. Унан ҡалһа Юғары донъяға, Күк, тәңреләр донъяһына әйҙәгәндәй итә. Шул арала өс донъяны бер итеп, ҡара көстәргә тынғылыҡ бирмәй, яҡтылыҡты, яҡшылыҡты яҡлап көрәшкә сыҡҡан олонхо батырҙарына дәл булаһың, йә ҡара шаман менән аҡ шамандың хикмәттәрен күреп таң ҡалаһың… Ә ҡолаҡ төбөндә гидтың тауышы. Ул ошо мифик донъяла аҙашыуҙан һаҡлаусы компас хеҙмәтен дә, етәкләп барыусы вазифаһын да атҡарғандай тойола.

– Үҙ милләтенең рухи уяныуы хаҡында ҡайғыртыуы, – ти ул тауыш, – Степановты олонхо темаһын үҙләштереүгә килтерҙе. Иғтибар итегеҙ, рәссам шамандың донъяға килеүен нисегерәк күрһәтә. Беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа ул донъяға килә, беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа бала сағын үткәрә лә олоғайып та китә. Бына был ағасҡа иғтибар итегеҙ. Изге ағас был. Иҫәпләп ҡарағыҙ әле, уның нисә ботағы бар?

– Берәү, икәү… туғыҙ! – тиешәбеҙ беҙ хор менән.

– Тап шулай. Бына ошо ағастың ботаҡтарынан ярала ла инде шамандар. Рәссам ниңә туғыҙынсы ботаҡты айырымыраҡ итеп, айырыбыраҡ һүрәтләгән тиһегеҙ? Бына ошо ботаҡтан иң көслө шаман ярала ти. Иғтибар итегеҙ, бында һәр төрлө ҡош-ҡорт һүрәтләнгән. Улар – шамандың юлдаштары. Туғыҙынсы ботаҡтан яралып, билдәле бер йәшкә еткәс, уның кәүҙәһе реаль булмаған донъяла өлөштәргә туралған. Шул килеш ята биргәс, шамандың тәне тәүҙә ут менән, шунан һыу менән сыныҡтырыла. Был ваҡытта уның йәне, бына күрәһегеҙме, ҡош ҡиәфәтендә күккә аша. Шул ҡош Шаманды бөтә ғүмере буйынса оҙатып йөрөй. Шул ҡош уны хәүеф, ҡурҡыныстан ҡурсалай ҙа.

Сыныҡтырылғандан һуң шаман ысын шаманға әүерелә. Бына хәҙер Степановтың бына был картинаһына иғтибар итегеҙ инде. Нимә күрәһегеҙ?

– Бер ҡарт йәшерәгенең күҙенә үҙ күҙҙәренән лазерҙы хәтерләткән нур ебәрә түгелме?

– Эйе, эйе. Ҡарт шаман бына шулай йәш шамандың күҙҙәренә нур ебәрә. Ҡәҙимге кеше бындай нурҙы күтәрә алмай, ти. Әгәр шаманлыҡҡа һынау үтеүсе ошо нурға бирешмәһә, ул ысын шаман тип табыла. Шаман кейемде үҙе текмәй. Ҡарт шаман йәшенә шулай ти: “Бынан йыраҡта-йыраҡта, тундрала фәлән-фәлән тигән кешенең көтөүендә шундай-шундай бер болан булыр. Шуның тиреһен алып, шунан фәлән ерҙәге фәләнә тигән ҡатын һиңә кейем тегер. Шаман кейеменә тағылған төрлө тимер шылтыраҡтарҙы ла билдәле төбәктәге билдәле тимерсенән генә эшләтеү шарт. Шунан һуң йәш шаман ҡағыу(бубен) эшләтә. Фәлән ерҙә фәлән кешенең шундай-шундай һыйырынан шундай-шундай быҙау тыуыр. Шул быҙау тиреһенән фәлән тарафтарҙағы фәлән кеше ҡағыу эшләп бирер. Шаман үҙенең

бубенын һис бер ваҡытта ла башҡа кешегә тоттормай икән ул. Әгәр үҙе үлеп-фәлән китһә, бубены ла, башҡа әйберҙәре лә уның ҡәбере тирәһенәрәк күмелә йә тайгаға йәшерелә. Шаманды ла, башҡаларҙы ла элек ергә күммәгәндәр, дүрт тәяу ҡағып, шуларҙың өҫтөнә бурама яһап, шунда – ер өҫтө ҡәберенә һалғандар. Башҡа яҡтарҙа нисектер, сахала шулай, тиҙәр. Кешенең ауырыуы – ҡара көстәрҙең еңеүе. Кешегә күскән шул ҡара көстәрҙе ҡыуыу өсөн шаман им-томон атҡара. Сыуалға дөрләтеп ут яғалар. Шунан ул янып бөтөп, уты һүрән генә яҡтылыҡ бирә башлағас ҡына шаман эшкә тотона. Бына күрәһегеҙме, был картинала ул төрлөсә ҡылана. Шул саҡ бик яман аҡырына, ҡысҡырына, төрлө ҡош-ҡорт тауышы сығара. Ҡарап ултырған тамашасыларға ҡот осҡос күренештәр күрһәтә: йә ишек асылып китә лә, ғәләмәт ҙур айыу килеп инеп, үкереп ебәрә, йә тотош өйҙө һау баҫа. Кешеләр урындыҡҡа, һәндерәләргә менеп бөтә. Ә теге һыуҙа хатта балыҡтар йөҙөп йөрөй башлай. Бына шундай шамандар, олонхоһуттар (олонхо ижад итеүсе, олонхо башҡарыусылар) булған. Аңлауығыҙса, гипноз яһау һәләтенә эйә булған улар.

Шаман үткәргән сеанстан һуң һауығып китеүселәр ҙә булған. Бынан шаман психотерапевт вазифаһын уңышлы атҡарған, тип иҫәпләргә була. Әммә һөҙөмтә гел генә ыңғай булмаған. Нисек кенә булғанда ла, үҙенең ҡамлау сеансынан һуң шаман хәле бөтөп йығылыр булған. Степанов та быға иғтибар иткән...

Тамашасы психологияһына тетрәндергес тәьҫир итмәле ошо картиналар менән танышҡас, тере шамандың үҙен күргәндәй, олонхоноң мифологик нигеҙе хаҡында ҡыҫҡаса курс үткәндәй булаһың.

Әйткәнемсә, ҡара шаман, аҡ шамандар була икән. Бынан бер нисә йыл элек кенә ошо тема буйынса Саха илендә махсус ғилми конференция булып уҙған. Шуғалыр ҙа инде беҙгә тере шаманды, уның ҡамлау рәүешен күрһәтеүсе булманы. Хәйер, үҙе өсөн ғәҙәти булған әйбер, күренештең башҡаларҙы ла ҡыҙыҡһындырыу ихтималы хаҡында бик үк уйланып бармаусан шул кеше.



*Аҡ шаман Д.Д.Попов (Кобагон) менән*

Күргәҙмәлә генә түгел, конференцияла ла шаманлыҡ темаһы буйынса һөйләшеү булыуға булды. Ләкин һөйләшеү – һөйләшеү генә инде ул. Шулай ҙа мин бер шаманға юлыҡтым. Ул бер үк ваҡытта филармонияла эшләүсе артист, бер үк ваҡытта олонхоһут та булып сыҡты. Исем-аты Попов Дмитрий Дмитриевич, лаҡап исеме (псевдонимы) – Кобагон.

– Нисегерәк шаман булып киттегеҙ? Был һәләт быуындан-быуынға биреләме, нисек? – тип һораным тегенән. Шаман тигәнем ир уртаһы кеше ине. Сәсе һуңғы модаса — ялбыр, тип уйлап ҡуйҙым да Степановтың картинаһындағы шамандарҙың ялбыр сәсле итеп һүрәтләнеүен иҫкә төшөрөп, ул уйымдан кире ҡайтмаҡ булдым. Ә бына өҫтөндәге кейеме өр-яңы фасонлы костюм ине. Минең һорауыма ул былай тип яуап бирҙе:

– Шаманлыҡ һәләте быуындан-быуынға, нәҫел буйынса күсеп килә. Минең бабам көнсығыш улуста иң мәшһүр шаман булған. Лена аръяғында ул үҙенең Аи тигән ырыуына нигеҙ һалған кеше. Әллә нисә быуын аша уның шаманлыҡ һәләте миңә лә килеп еткән. Хәйер, һәр әҙәмдә лә тыумыштан уҡ ниндәйҙер һәләт башланғысы була. Тәбиғәт биргән ана шул һәләт миндә бала саҡта уҡ һиҙҙертә башланы үҙен. Әле лә яҡшы хәтерләйем. Мин бәләкәй, шул тиклем бәләкәй инем. Әммә алда ни булырын һиҙә инем. Мин етемлектә үҫтем. Өс йәшемдә атайҙан ҡалдым, биштә – әсәйҙән. Ҡыйын, бик ҡыйын

була башлаһа, тәбиғәт ҡосағына китә инем. Иҫ кергәс үҙемдәге тәбиғи һәләтте үҫтереү өҫтөндә эшләргә тотондом. Элек шаманлыкты ҡаты эҙәрләнеләр, тыйҙылар. Республикабыҙ суверенитет алғас ҡына, шаманлыҡ менән ихлас шөғөлләнә башланым.

– Һеҙ ҡара шаманмы, әллә ағымы?

– Ҡара шаман ҡара донъя, йәғни Аҫҡы донъя менән шөғөлләнә. Мин – аҡ шаман. Ҡара шаман кешегә зыян ҡылыусы ҡара көстәр менән идара итә. Аҡ шаман, киреһенсә, Ер өҫтөн ҡара көстәрҙән таҙарта.

...Барған көндөң кисендә хужалар беҙҙе тере олонхоһуттар менән таныштырҙы. Улар беҙгә “Элес-хара аттағы Эһә хара“ тигән олонхонан өҙөктәр башҡарҙы.

Заманында саха фольклорсылары был әҫәрҙе Оготоев Петр Васильевич тигән танылған уҡытыусы-олонхоһуттан яҙып алған булған. Шул әҙер тексты башҡарыусы олонхоһуттар, әллә ни баш ватып тормаған, өҫтәренә милли кейемдәр кейгәндәр ҙә, теҙелешеп ултырып, әҫәрҙе роль буйынса башҡаралар. Ҡатнашыусылар персонаждар һанынса. Был олонхоһуттар ил эсендә дан алған, ил тышында һан алған ижади төркөм икән. Унда филармония артистары ла, драмтеатрҙыҡылар ҙа ҡатнаша, уҡытыусылар ҙа, рәссамдар ҙа, башҡаһы ла бар. Мин танышасаҡ аҡ шаман да шулар араһында булған икән. Олонхола ул шаман монологтарын атҡарған. Гримланып, яһанып-төҙәтенгәс, милли кейем дә кейеп алғас ни, бая һөйләшкәндә үҙе әйтмәһә, был хаҡта белмәҫ тә инем әле мин. Таныған сүрәттә лә, унда ҡасан олонхо шаманы, ҡасан үҙенең шаманлығы башланғанын белеп тә булмаҫ ине. Хәйер, бер ул ғына микән? Башҡаларҙың да әйбер, күренеш һәм уларҙың рухы, рух һәм ул кәүҙәләндергән әйбер күренеш араһындағы сик үткәрә алмауына шаһит булғыланыҡ беҙ. Бары тик коллектив ноосфера аңын, тәңрелекте файҙаланып ҡына, тормош тыуҙырған проблемаларҙы ғәҙел хәл итеү, Евразия халыҡтарын берҙәм суперэтносҡа берләштереү мөмкин буласаҡ, тип (“Хоһуун“ хәрәкәте стратегияһы декларацияһы“ проектынан), һуңғы ваҡытта бында тәңрелек динен пропагандалай башлауҙары ла бушҡа түгелдер, күрәһең.

Олонхо башҡарып, был коллектив Францияла, Германияла, Италияла, Бельгияла, Польшала, Чехословакияла (ике ил бергә саҡта) йөрөп ҡайтҡан икән. Телӛгән кеше уларҙың тауышын теләгән ваҡытта өйөнән сыҡмай ғына тыңлай, ҡарай ала. Уларҙың сығыштары видео-, аудиокассеталарға яҙылған.

### Өй артында бүре бар

Конференцияға байтаҡ ҡына доклад һәм хәбәрҙәр(сообщениелар) тәҡдим ителгән ине. Программа бай ғына. Тематика киң. Шуға күрә лә, ҡәҙимге ғилми форумдарҙағыса, бер нисә секцияға бүленеп эшләргә тура килде. Ғәҙәттә, ҡунаҡтар үҙҙәре тәғәйенләнгән секция эшендә ҡатнашыуҙан тыш, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған тема, проблема буйынса уҡыла торған докладтар тәҡдим ителгән секцияларға ла барып сығырға өлгөрә торғайны. Программа менән танышып сыҡҡас уҡ миндә лә шул ғәҙәтте ғәҙәт итеү теләге тыуғайны. Әммә тәүге секция урындағы фольклорсы С.П. Оюнская (ул күренекле революционер һәм танылған әҙип һәм фольклорсы П.Оюнскийҙың ҡыҙы булып сыҡты), Мәскәүҙән килгән ҡунаҡ, М.Горький исемендәге донъя әҙәбиәте институтының фольклор секторы мөдире, әле генә Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы итеп һайланған һәм Рәсәйҙә әлеге көндә бындай дәрәжәгә ирешкән берҙән-бер фольклорсы В.М.Гацак менән берлектә беренсе секцияның эшен етәкләү йөкмәтелгәнлектән, башҡалар янына инеп сығырға форсат теймәне. Әммә ҡайһы бер ғалимдар менән пленар ултырыш араһында танышып һөйләшеүҙәр ул тиклем үкенергә лә урын ҡалдырмаған кеүек. Бына шундай рәсмиләштерелмәгән, алдан планлаштырылмаған бер һөйләшеү минең өсөн айырыуса әһәмиәтле булды.

Конференция асылып, пленар ултырышта бер нисә доклад, шул иҫәптән минең дә сығышты тыңлағандан һуң тәүге тәнәфес иғлан ителгәйне, яныма йәп-йәш кенә саха ҡыҙы килеп ултырҙы һәм:

– Яҡут дәүләт университеты аспиранты Егорова Людмила Ивановна, – тип

таныштырҙы үҙен. Һәм шунда уҡ, күптәнге танышын осратҡандай: – Бына быларҙы беҙҙең йәмғиәт һеҙгә бүләк итә, – тине. Төргәктә ике китап, бер гәзит ята ине. Бүләкте эйәһе алдында асып ҡарау фарыз.

– Рәхмәт! – тинем дә китаптарҙың береһен ҡулыма алдым. Ул Андрей Кривошеин–Айыңға тигән кешенең бая телгә алынған “Евразийский союз“ тигән хеҙмәте ине (Якутск, 1998). Мин уны битләгән арала Людмила Ивановна:

– Автор ҡала төҙөлөшө буйынса белгес. Был китабын ул Лев Гумилев, Морат Аджи (беҙҙеңсә, Хажи ғына була торғандыр моғайын) ише авторҙарҙың хеҙмәттәре менән танышыу һөҙөмтәһендә яҙған. Рәсәйҙең күсмә халыҡтар нигеҙләгән Евразия дәүләте булыуын иҫбатлай, – тип, китап һәм уның авторы хаҡында белешмә биреп тә өлгөрҙө.

– Ярар, – тинем дә мин, икенсе китапҡа үрелдем. “Олонхо – духовное наследие народа“ (Якутск, 2000) тигән мәҡәләләр йыйынтығы ине быныһы. “Йөкмәткеһе“ тигән битен асыуым менән, янымдағы аспиранттың фамилияһы күҙгә салынды. “Различия трех тотемных образов волка у якутов“ тип атала ине уның мәҡәләһе. Бая конференцияға тәҡдим ителгән докладтарҙың тезистары баҫылған йыйынтыҡ таратҡайнылар. Унда ла ошо уҡ авторҙың бүре образына ҡағылышлы материалы бирелеүенә иғтибар иткәйнем. “Мифологема волка в олонхо“ — бына шулай тип атала ине уның тезистары.

– Бәй, һеҙҙә лә бүре образына бәйле мотивтар бармы ни? – тинем, был хаҡта әүәлдән бер ни тиклем хәбәрдар булһам да.

– Эйе, – тине лә аспирант ҡыҙ, яҡут фольклорында был януар образы ниндәй урын биләй, ни өсөн — шул турала һөйләне. Бер ни тиклем хәбәрҙәр булыу — бер эш. Урындағы милли фольклорҙы йәнле башҡарылышында белгән кеше менән ултырҙаш булыу – үле хәрефтәр менән йыйылған текстарҙан алынған мәғлүмәткә ҡарағанда мең артыҡ. Минең иғтибар менән тыңлауымды күреп, йәш коллегам үҙе белгәнде мауыҡтырғыс итеп һөйләне. Уның шулай, аңлатмалар бирә-бирә, онотолоп китеп һөйләүе мине тағы ла иғтибарлыраҡ тыңларға мәжбүр итте. Быға шул да сәбәпсе ине: Якутскиға юлланыр алдынан ғына, Абдулҡадир Инандың юбилейына арналған ғилми конференцияла сығыш яһау өсөн докладҡа әҙерләнгәндә, уның хеҙмәттәре араһында бүре образына ҡағылышлы бер мәҡәләгә юлыҡҡайным. Әле бына үҙем ЯДУ аспирантын тыңлап ултырам, үҙем, шул оло ғалимдың күҙәтеүҙәренә барып олғашырмы-юҡмы әле ишеткәндәрем, тип уйлап ултырам.

Яҡут эпосында, йәғни олонхоларҙа, мифик бүре образы Урта донъя менән бәйле телгә алына икән. Мәҫәлән, “Эр-Соготох“ тигән олонхо буйынса, өҫкө донъя – тумыртҡа донъяһы, аҫҡыһы – үгеҙ хакимлыҡ иткән донъя, урта донъя – бүренеке. Саханың эпик фольклорында бүре образы айыу образы менән йәнәш бирелеүсән икән. Айыу, яҡут мифы буйынса, кешенең тәүбабаһы иҫәпләнә. “Туҡта, туҡта. Беҙҙә лә шулай булыуы ихтимал бит“, – тим эстән генә, айыуҙы “бабай“, “олатай“ тип әйтеүгә беҙҙе иҫтә тотоп. Унда ла шул инаныс сағылмаймы? Башҡорттоң бер мифы буйынса, борон бер һунарсы, урман ауыҙына барып етеү менән, билендәге ҡынынан хәнйәрен тартып алып, шуны ергә ҡаҙаһа, айыу ҡиәфәтен алыр булған. Бер көндө ауға сығыр алдынан ғына өйөндә һауыт-һаба шалтырай. Шунан ни, иренә асыуы килгән ҡатыны ауға киткән ирен аңдып ҡына артынан бара ла, тегеһе хәнйәрен ҡаҙап айыу ҡиәфәтенә ингәнен белә. Айыу урманға инеп китеүгә була – уға үс итеп, хәнйәрҙе алып йыя ла ҡуя. Йыйыуын йыя – асыуы баҫылғас, урынына ҡаҙайым тиһә, таба алмай. Шунан ни, ире, ҡабат кеше ҡиәфәтенә инә алмайынса, айыу булып ҡала. Башҡорттоң “Айыуғолаҡ“ тигән әкиәте буйынса, Айыуғолаҡ атлы бәһлеүән айыу кәләш иткән ҡатындан тыуа. Айыу – кеше заты. Шуға ла уның ите хәрәм, уны ашарға ярамай. Шулай ти боронғо инаныс.

Әңгәмәсемдән мин шуны белдем: сахаларҙың олонхоларында бүре бүре генә түгел, эт вазифаһын башҡарыусы йән эйәһе рәүешендә лә күрһәтелә икән. Мәҫәлән, бер олонхола “әбей һул ҡулында – бүре-этте, уң ҡулында айыу-

этте етәктә алып китеп бара ине ти", тигән һүҙҙәр бар икән. (Асығын һоралмаған: ҡайһы олонхонан алынғандыр был миҫал).

Яңы тыуған ир баланы сахалар бүре тиреһенә биләр булғандар, мәрхүм булыусыны ла бүре тиреһе менән кәфенләгәндәр. Әңгәмәсемдән:

– Ә был әйткәндәрегеҙҙең мәғәнәһе ни булыр? – тип һорағас, ул:

– Шуныһы ҡыҙыҡ — бүре олонхоның ыңғай геройы ҡулында ғына үҙенең яҡын ҡәрҙәше эт вазифаһын үтәп ҡалмай, кире көстәр баһадирына ла шундай уҡ хеҙмәтен күрһәтә ала.

Шулай тине лә әңгәмәсем, бүренең ҡайҙа ла үҙенең хужаһын һаҡлаусы, уның ҡулында тере ҡорал вазифаһын үтәүсе булыуына, шул арҡала боронғо Ҡытай яҙмаларында төрки яугирҙәренең "бүреләр" тип нарыҡланыуы менән ауазлашыуын билдәләне. Ул шулай тине, ә минең башымда икенсе фекер уянды. "Бүре-эт"(бында "бүрәт" этнонимының ошо һүҙҙән яралыуы хаҡындағы легендаға ҡағылып тормайым), "айыу-эт" тигән һүҙҙәр башҡорт әкиәттәренә хас традицион башламды хәтергә төшөрҙө. Хәтерегеҙҙәме, әкиәт оҫталары һүҙҙе нисегерәк башлай торғайны?

"Борон-борон заманда,
Кәзә – команда,
Өйрәк – үрәтник,
Күркә – дисәтник,
Бүре – бағауыл,
Ҡарғалар ҡарауыл булып торғанда;
Һайыҫҡандар – һанат,
Турғайҙар – һалдат,
Әтәстәр – әфисәр,
Тауыҡтар талмас булып
хеҙмәт иткәндә,
Арыҫландар – ат,
Йыландар — ҡамсы,
Төлкөләр яусы булып йөрөгәндә, булған ти бер хан".

"Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны" тигән көлдөрөктөң башламы был. Ошондайыраҡ сурытма-башлам һәр төрлө әкиәтте асып ебәреүсе ҡапҡа хеҙмәтен үтәгән борон. Ғәжәп бит. Үҙе тыйыуҙы (команданы) танымаҫ хайуан булған кәзә – юл күрһәтеүсе, тыйыусы, етәксе – командир; үҙе ҡарауылһыҙ малынды сәлдерергә әүәҫ бүре, мә һиңә – бағауыл. "Үрәтник", "дисәтник", "һанат" (сенатор), "һалдат", "әфисәр", "талмас" ише һүҙҙәр, әлбиттә, башҡорттар Рәсәй ғәскәрендә хеҙмәт итә башлағас ҡына, беҙҙең әкиәт башламына килеп ингән (Был хаҡта Жәлил Кейекбаев үҙенең махсус курсында әйткәйне. Уның хеҙмәттәрендә лә ҡабатлана был фекер). Борон улар урынына икенсе һүҙҙәр ҡулланылған булыуы ихтимал. Бәлки ошо вазифалар эйәһе итеп күрһәтелгән йә эйәләре урынына ла башҡа һүҙҙәр әйтелгәндер. Нисек кенә булһа ла, бындай башламдар "борон-борон заманда" тигәнде иллюстрациялап, әкиәт тыңлаусыны әлмисаҡ заманындағы мифик дәүергә алып китергә тейеш булған. "Арыҫлан — ат" тигәнгә генә иғтибар итәйек. Ул – ҡоро хәбәр, тота килеп әйтелгән һүҙбәйләнеш кенә түгел. Ул – тотош образ. Образ, сөнки "Урал батыр" эпосында арыҫлан, ысынлап та, батыр өсөн ат вазифаһын үтәй. Урал батыр Һомай ярҙамында күк аты Аҡбуҙатты ҡулға төшөргәнсе. "Гәйнә менән Әйнә" легендаһы рәүешендә генә беҙгә килеп еткән бер эпос ярсығында ике батыр бер аҡ боланға атланып йөрөй. Хәҙерге эстетик ҡараштарыбыҙ, аңыбыҙ кимәленән ҡарағанда, былар барыһы ла шыр шаштырыу-фантазия емеше булып тойола. Әммә, төптән уйлаһаң, фантазия, шаштырыу тигәнебеҙҙең архетип законсылығы буйынса, боронғо хәтер кодына таяныуы, аңыбыҙҙан тыш(подсознательно) беҙгә быуындан-быуынға күсә килеп бирелгән реаль мәғлүмәт булыуы ла ихтимал.

Ни булмаҫҡа мөмкин был донъяла? Арыҫлан тигән януар элек Уралда булғанмылыр, юҡмылыр, мәгәр халҡыбыҙ ижады уның образын ярайһы ғына мул файҙалана. Әкиәт-фәләнде әйтеп тә тораһы түгел. Хәйер, әкиәт тигән ижад төрө, уның жанрҙары ғына түгел, сюжеттары ла ғәмәлдә интернациональ күренеш. Сөнки жанр үҙе боронғо уртаҡ бер мәҙәни үҙәктә яралып, шунан донъя гиҙә башлай. Был үҙәк хаҡында һүҙ сыҡҡанда, Яҡын Көнсығышты, атап әйткәндә, Ике йылға араһын – Сүмәр (оригиналда Шумерҙың әйтелеше, яҙылышы шулай булған) илен, Месопатамия, Вавилонияны күҙ уңында тоталар. Асыҡлауҙарынса, кешеләр тәүләп шунда ҡырағай хайуандарҙы ҡулға эйәләш-

терә башлаған. Иген итеп игелер үҫемлектәр ҙә тәүҙә шунда үҙләштерелгән. Рухи мәҙәниәт күренештәренең дә башы шунда тиҙәр. (Бөгөн булһын археологтар унда соҡона. Әммә улар тапҡан ҡомартҡыларҙа шунда йәшәгән сүмәрҙәрҙең (урыҫтар "шумер" тигән ҡәүемдең) үҫешкән мәҙәниәтенә тиклемге дәүерҙең сағылмауы хайран ҡалдыра. Әллә улар ситтән килгәнме? Әллә күктән төшкәнме? Билдәһеҙ). Шулай булғас, әкиәттә арыҫланы ла, филе лә йәшәп ятһа, һис тә ғәжәпләнәһе түгел.

Әммә шуныһы ғәжәп уның: арыҫлан образы мифологик эпосыбыҙ "Урал батыр"ҙа ғына түгел, саф мөхәббәтте данлаусы "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" тигән эпостың варианттарында ла, хатта ки "Бабсаҡ менән Күсәк" ("Бабсаҡ бей менән Күсәк бей") тигән тарихи эпоста ла бар. Батыр егет тураһында әйтергә итһә, йырауҙарыбыҙ быны "ир-арыҫлан", "арыҫландай" тип кенә билдәләй. "Асыусан була арыҫлан балаһы" тип башланған йыр ҙа бар. Нисек кенә булғанда ла, бындай миҫалдар үҙенән-үҙе генә, буштан-бушҡа ғына тыумаған. Ҡасандыр, нисәнселер быуынғаса, ҡайҙалыр киләсәктә башҡорт тигән халыҡты хасил итеүҙә ҡатнашасаҡ ниндәйҙер ҡәүемдәр, ишетмеш буйынса ғына түгел, белеп-күреп тә, эш итеп тә, арыҫлан тигән януар тураһында төшөнсә алған. Ҡасандыр ана шул бабаларыбыҙҙан үҙе "арыҫлан" тигән метафора менән нарыкланмалы алып (алп) затлы ир-аттың, әлеге Әйнә менән Гәйнә тигән мифик (мифлаштырылған) ике ағай бер боланға менгәшеп йөрөгән кеүек, арыҫланды ҡулға эйәләштереп, шуны менге мал сифатында файҙаланһа ла, ғәжәп түгел. Ник ғәжәп булһын ти? Бөгөн циркта арыҫланды хужаһы нисек бейетеп тотҡанына иҫебеҙ китмәй ҙә баһа!

Арыҫланды арбай белгән заттарыбыҙ ҙа булған беҙҙең. Кинйә абыҙдың атаһы Арыҫлан ер дәғүәләшеп батшаға килгәс, батша уны арыҫлан ситлегенә ябырға ҡушҡан, ти. Иртәгәһенә батша ғали йәнәптәре: "Барығыҙ әле, теге башҡорттоң һөйәк-мөйәген йыйыштырып алығыҙ", – тип фарман бирә. Ситлек янына килһәләр, хеҙмәтселәр ни күрә: ике арыҫлан – арыҫлан тигән йыртҡыс януар менән Арыҫлан атлы уҙаман һин дә мин татыу ғына ултыралар ти. Теге януар башын Арыҫлан батырҙың тубығына һалып тороп, бесәй һымаҡ мыр-мыр килеп иркәләнеп ята, ти. Иҫе киткән, ти, тегеләрҙең.

Нисек кенә булғанда ла, саханың йәш ғалимәһе менән әңгәмәләшеп, мин шуға тағы бер инандым. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, шаҡ ҡатырғыс фантазия емеше булып тойолған күренештәр ҙә фольклорға тиккә генә килеп инмәй. Уларҙа ла боронғо бабаларыбыҙҙың ғәмәли аңы, ҡылған ғәмәле, тәжрибәһе сағылыш ала.

Мәғлүмдер ки, табу, йәғни билдәле бер эште ҡылыу, ниндәйҙер һүҙҙе ҡысҡырып әйтеүҙе тыйыу йолаһы буйынса, ул йола хаҡында төшөнсә төшөбөҙгә лә кермәүенә ҡарамаҫтан, беҙ *"айыу"* тиәһе урынға, әле генә әйткәнемсә, *"бабай"*, *"олатай"* тибеҙ. Айыуҙы *"айыу"* тип әйтмәҫ өсөн, *"урман хужаһы"* тип әйтеү ғәҙәте лә бар. (Үкенескә ҡаршы, һуңғы осорҙа, ваҡытлы матбуғат, радио, телевидениеның тырышлығы менән, урыҫтың "косолапый"ын калькалаштырып, "таййыштабан" тигән яһалма атаманы ҡуллана башланыҡ). Шуның кеүек "бүре" төшөнсәһен биреүсе һүҙҙе лә башҡа һүҙ менән алмаштырыр булғандар. Абдулҡадир Инан ҡалдырған мәғлүмәттәр буйынса, мәҫәлән, алмандар (немецтар) *"бүре"* мәғәнәһен биреүсе һүҙҙе (wolf) *ҡорт, селәү, ҡарышлауыҡ, бөжәк* төшөнсәһен биреүсе *"das Gewurn"* һүҙе менән алмаштырыусан икән. Поляктар ҙа бүре тураһындағы төшөнсәне *"робак"*, *"селәү"*, *"бөжәк"* мәғәнәһендәге һүҙ ярҙамында бирәләр. Эстондар – башҡортсаға "эт" тип тәржемә ителмәле *Huhd* тигән немец һүҙен, литвалар *"урман эте"* мәғәнәһендә *"мишкини шуо"* тигән һүҙбәйләнеште ҡуллана икән. Уғыҙ төркиҙәренең "бүре" төшөнсәһен немецтар, поляктар биргән атамаға яп-яҡын булған *ҡорт* һүҙе ярҙамында биреүгә күнегеүҙәре лә боронғо табу йолаһынан килә.

Сахалар ҙа был традициянан ситтә ҡалмаған. Уларса бүренең төп аталышы – *бөрө*. Ә табу йолаһы уны *"ҡутуруҡтах"* тип атауҙы талап иткән (*ҡутуруҡ –ҡойроҡ*, ә *тах* беҙҙәге *-лы* ялғауына тап килә, йәғни был һүҙ *"ҡойроҡло"*

тигәнде аңлата). Әммә башҡа берәй нәмәнең атамаһы итеп ҡабул ителгәндә, тере бүрегә ҡарата табу булған был “*бөрө*“ һүҙе табулығын “оноткан“, ахырыһы. Сахаларҙың ҡайһы бер этник төркөмдәре бөгөн булһын “*бөрө*“ һүҙенән башлана. Мәҫәлән, Амгин, Вилюй, Нам улустары(районды) биләмәләрендә төйәкләнгән сахалар үҙҙәрен *бөрө бөткүннәр — беткүн бүреләре,* Хангалас улусундағы II Мальжагар наслегында(ауылында) йәшәүселәр үҙҙәрен “*бөртөлоох бөрө*“ – *алғы тәпәйҙәрендә өс юлаҡ булған бүреләр* тип атап йөрөтә.

Саха иленең күренекле фольклорсыһы А.Е.Кулаковский әйтеүенсә, борон уның бабалары Бөрө Дьэһик тигән Күк тәңреһенә инаныр булған. Бөрө Дьэһик тигән дөйөм яҡут тотемы, Саха дәүләт университеты аспиранты Л.И.Егорова раҫлауынса, төркиҙәрҙең боронғо уртаҡ бабалары инанған бүре тотемына барып олғаша булыр. Боронғо бер легенда буйынса, төркиҙәрҙең ҡәүем булып йәшәп алып китеүенә инә бүре сәбәпсе була. Шул януар ун йәшлек ир баланы үлемдән ҡотҡара. Уны тәрбиәләп үҫтерә. Шул бала ир еткәс, инә бүре уға ун улан табып бирә була. 691 йылда яҙылған Ҡытай йылъяҙмаһында төркиҙәрҙең *“бүре уландары“* тип аталыуы ошо мифҡа нигеҙләнеүе ихтимал.

Шул уҡ йәш ғалимәнең уйынса, “*кураанах иини сэттэтэ эргийбит бөрө бөтүнггэр*“, йәғни “*буш өңдө ете ҡат урап йүгергән бетюн бүреләре*“ тигән ырыуҙың этнонимы ла шуға ишара. Ғалимәнең фекеренсә, *иин(өң)* һүҙе был атамаға сахаларҙың бабалары дала гиҙеп, күсенеп йөрөгән дәүерҙә генә йәбешеүе ихтимал. Ни өсөн тигәндә, дала бүреләре генә өң ҡаҙа икән. Бына ул легенда: “Нам улусундағы Бөтүн наслегы(ауылы. – Ә.С.) халҡын борон “Иччитэх иини сэттэтэ эргийбит бөрө таңаралаахбөрө бөтүңнэр“ (буш өңдө ете ҡат урап йүгереп сыҡҡан бүре тәңреле бөтүндәр“ – “Бетюнцы с божеством волком, семь раз обежавшим пустую яму“), тип үсекләр булғандар“.



Бына ни өсөн бүре улар өсөн тәңре хисабында икән. Бөтүндәрҙең бабалары, көслө бер дауыл арҡаһында, бер йылға утрауынан сыға алмай, шунда ҡалғас, аслыҡтан ҡырыла башлайҙар. Имендәре, шундай хәлгә ҡалмаҫ өсөн, соҡсоноп йөрөй торғас, бүре йыйындыһына дәл була. Кеме бүре ризығын уртаҡлашырға өлгөрә, шуныһы тере ҡала тегеләрҙең. Бүре балыҡ, ашарға яраған үлән тамырҙары йыйған була. Ризығы менән үлемдән ҡотолорға ярҙам иткәне өсөн, кешеләр бүрене тәңре тип танығандар ҙа инде.

Әле әйтелгәндәр үҙ ерлегебеҙҙә тыуған мифологик легендаларҙың бүре культына бәйле булғандарын хәтерләргә мәжбүр итә.

Боронғоно белеү, йола хоҡуғы буйынса, — фарыз эш,

тип иҫәпләнгән замандарҙа, үҙ нәҫелырыуының тарихы менән генә сикләнмәйенсә, халҡының үткән юлы хаҡында хәбәрдар булыу — айырыуса маҡтаулы күренеш, тип ҡаралыуы – бәхәсһеҙ. Ана шул арҡала боронғо бабаларыбыҙҙың сығышын, уларҙан ҡалған нәҫел-нәсәптең, үрсеп, халыҡ булып йәйелеп китеүен, ниндәй этноним (атама) алыуҙарын аңлатҡан сюжеттар таралған.

"Башҡорт" этнонимын аңлатыусы легендаларҙың айырыуса киң билдәлеләре, нигеҙҙә, ике версияға ҡайтып ҡала. Уларҙың береһе буйынса, башҡорттарҙың боронғо бабалары ҡайҙандыр көньяҡтан, Төркиәнән бүрегә эйәреп килгән. Йәнәһе, бүрене, боронғоса әйткәндә, ҡортто (бүрене"ҡорт" тип йөрөтөү һөйләштәрҙә әле лә осрай, "ҡош-ҡорт" тигән ҡушма һүҙҙә лә һаҡланып ҡалған) баш итеп килгәнгә, уларҙы *башҡорт* тип йөрөтә башлағандар.

Сюжеттың структураһын барлыҡҡа килтереүсе мотивтарҙың(элементтарҙың) иҫәбе, урынлашыу тәртибе буйынса легенданың варианттары бер-береһенән ярайһы ғына айырылһа ла, уларҙың күпселегендә уртаҡ элементтар булыуы күҙгә ташлана. Шуларҙан бөтә варианттарҙа ла боронғо бабаларыбыҙҙың(боронғо башҡорттарҙың) көньяҡтан йәки, ғөмүмән, ситтән килеп, Уралда яңы ер табыуҙары, шунда ил булып төпләнеп ҡалыуҙары тураһындағы мәғлүмәт бигерәк тә тотороҡло. М.Х.Минһажетдинов менән ошо юлдарҙың авторы әле генә беҙҙең күҙ алдында үтеп киткән быуаттың урталарында уҡ"башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларын Уралға бүреләр башлап алып килә" тигән мотивта "билдәле бер тарихи дөрөҫлөк, уларҙың ысынлап та ситтән күсеп килеүе" сағылыуын әйткәйнеләр инде (Минһажетдинов М.Х., Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт легендалары. // Башҡорт легендалары. – Өфө, 1969. – 17-18-се б.). Тарихсы Р.Ғ.Кузеев боронғо ғәрәп яҙмаларына таянып, VII-VIII быуаттарҙа ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының, айырым алғанда, "*бажгорд*", "*бурджан*" (хәҙерге башҡорт теле нормалары буйынса әйтһәк: "*башҡорт*" һәм "*бөрйән*" тигән ҡәүемдәрҙең Сырдарья – Амударья йылғалары, Арал диңгеҙе тирәләрендә күсенеп йөрөүҙәрен асыҡлағайны. Шул тирәләрҙә әле XIX быуатта ла айырым урындарҙа "*Башҡорт*" атамаһы һаҡланып ҡалғанлығы билдәле. Мәҫәлән, хәҙерге Үзбәкстандағы Термез ҡалаһына яҡынраҡ бер тауҙы Башҡорт тауы тип, Үҙәк Памирҙағы бер урынды ла Башҡорт тигән топоним менән билдәләп йөрөтөр булғандар. (Кузеев Р.Г. Происхождение башкирского народа. – М., 1974. – С. 426). Р.Ғ.Кузеев әле һүҙ барған сюжеттың дөйөм төрки ерлегендә тыуыуын да раҫлағайны. Шул мәғлүмәттәр нигеҙендә фольклор белгесе Ф.А.Надршина ул легенданы "башҡорттарҙың Урта Азия, Себер халыҡтары менән боронғо этник һәм культура бәйләнештәрен сағылдырыусы үҙенсәлекле бер күрһәткес" тип атағайны (Надршина Ф.А. Башҡорт халыҡ риүәйәт һәм легендалары. – БХИ: РЛ. — 22-23-сө б.).

Башҡорт ырыуҙарының көньяҡтан күсеп килеүе Учалы районында яҙып алынған "Алтын Урҙа" тигән йырҙа ла сағылған. "Бохара яғынан ике бер туған, Барын менән Табын, беҙҙең Уралға күсеп килгән". "Алтын Урҙа" тигән ҡаланы үткәндә" улар йыр сығарып йырлағандар, тиелә йырҙы оҙатып килгән риүәйәттә. Билдәле булыуынса, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында табын ҡәбиләһе бар. Уның составындағы туғыҙ ырыуҙың дүртәүһе — ҡара-табын, барын, теләү һәм күбәләк — иң ҙур ырыуҙар иҫәбендә йөрөтөлгән. Р.Ғ.Кузеевтың фекеренсә, табындар төрки сығанаҡлы ҡәбилә. Уларҙың заты ҡаҙаҡ менән ҡарағалпаҡтар араһында ла бар. Ҡыҫҡаһы, табындар — Урта Азия, Ҡаҙағстан менән бәйләнешле ҡәбилә. Шуға ла "Алтын Урҙа" йырында ла, уның риүәйәтендә лә тарихи хәҡиҡәт сағылған, тип әйтә алабыҙ. Бынан иһә Табын менән Барын тигән ағайҙар йөҙөндә ике ырыу яҙмышы кәүҙәләнгән булыуын аңлауы ҡыйын түгел. Ырыуҙы айырым шәхес образы аша һынландырыу, ғөмүмән, традицион фольклорға хас күренеш.

"Алтын Урҙа" йырының 1973 йылда Учалы районы Мулдаҡай ауылы Зөлҡәрнәев Әхмәтшанан(1898) Лийә Сағынбаева яҙып алған вариантында ике шәхес – ике ағай йөҙөндә бирелгән ике

ырыуҙың үҙ ҡәрҙәштәренән айырылып китеүҙе нисегерәк кисереүе лә сағылған.

Алтын шәһәрҙәрҙе үткән саҡта,
Ҡояш нуры төштө битемә.
Шул шәһәрҙе үтеп барған саҡта,
Ағай-энем төштө иҫемә.

(СДПИ - 1973).

Тимәк, табындар менән барындарға үҙ ҡәбиләләренән бүленеп китеүе еңелдән булмаған. Ләкин улар яңы ил эҙләп барыбер киткән. Тимәк, улар сараһыҙҙан киткән.

Йырҙың Д.Ж.Вәлиев яҙып алған вариантында ҡаланың исеме Алтын Урҙа тип бирелә. Алтын Урҙа тигән ҡаланың булыу-булмауы тураһында мәғлүмәт беҙгә билдәле түгел. Бәлки, тәүҙә алтын көмбәҙле ҡоролмаһы йә алтын бағаналы һарайы булған берәй ҡәлғә, нығытма күҙ уңында тотолғандыр. Бәлки, “Атай йорто – алтын бишек“ тигән мәҡәлдәге кеүек, тыуған төйәктең (ҡаланың) ҡәҙерле, ғәзиз булыуы шул “алтын“ тигән бер һүҙ менән генә белдерелгәндер. Аҙаҡ шул һүҙ XIII быуатта көнсығыш Европа менән Урта Азияла Батый хан етәкселегендә монгол баҫҡынсылары төҙөгән феодал дәүләттең “Алтын Урҙа“ тигән исеме менән ассоциациялашҡандыр. Хәйер, беҙҙең иғтибарҙы, униһынан бигерәк, ырыуҙың үҙ ҡәрҙәштәренән бүленеп китеүе, көньяҡтан төньяҡҡа тарихи Башҡортостан еренә күсенеп килеү мотивы ылыҡтыра. Быны шуныһы менән был миҫал да үрҙә телгә алынған ғалимдарҙың фекерен ҡеүәтләй.

Халыҡтың, ырыуҙың борон-борондан төйәк иткән урындарын ташлап, яңы ергә килеп, шуны ил итеп йәйелеүенә, билдәле, тарихи, сәйәси, иҡтисади шарттар сәбәпсе булған, әлбиттә. Мәгәр легенда ул сәбәптәрҙе үҙенсә нигеҙләй. Дөрөҫ, айырым варианттарында бабаларыбыҙҙың мал көтөп, һунар итеп, күсенеп ғүмер итеүҙәре, башҡа ырыуҙар, халыҡтар менән ер өсөн ыҙғышып тороуы һөҙөмтәһендә боронғо төйәктәрен ташлауҙары хаҡында әйтелеүе юғарыла телгә алынған сәбәптәрҙең реалистик сағылышы кеүек аңлашыла. Ә инде ҡайһы бер варианттарҙа улар, төшкә ингән билдәһеҙ изге зат йәки ырыу башы әйткән кәңәш буйынса, күсенеп китә була. Быныһында ла тормош дөрөҫлөгөнә яҡынлыҡ булыуы ихтимал, әлбиттә. Әммә яңы ил табыу һәр саҡ уйҙырма ярҙамында нигеҙләнә: йәнәһе лә, бабаларыбыҙҙы әлеге көндә беҙ йәшәгән ергә бүре эйәртеп алып китә була.

Әгәр ҙә мәгәр *“Күскен ҡәүемгә бүре тап булыры алдан уҡ иҫкәртелә“* мотивы легендала бирелә икән, бермә-бер *“барыр урын“, “бүре осрай“, “күскен уға эйәрә“* мотивтары ла була. Ләкин бүренең юл башлап китеүе тураһында әйтелһен өсөн, мотлаҡ уның осраясағы, күсеүсе кешеләргә ҡайҙа барырға икәнлеге тураһында мәғлүмәт бирелеүе шарт түгел. Легенданың һәр вариантында ла “боронғо төйәкһеҙ бабаларыбыҙға бүре(ҡорт) осрай, һәм улар шуға эйәреп киткән“ тигән мотив һәр саҡ тотороҡло һаҡлана. Шул тотороҡлолоҡ яңы ил төшөнсәһен биреүсе элементтың да, күсеп килеүселәргә, уларҙан таралған ырыуға, халыҡҡа, яңы урынға бәйле этиологик аңлатмалы мотивтың да тотороҡлолоғона сәбәпсе була. Ошондай бәйләнештән сығып, легенда нисек кенә вариантлашмаһын, унда *“күсеүселәргә ҡайҙа барырға“, “бүрегә эйәрергә кәрәклеген әйтеү“ – “яңы ерҙең (илдең) урынын“* күрһәтеү менән бер, тип билдәләргә була. Тимәк, легендала бүре(ҡорт) образына мөһим бурыс йөкмәтелгән: бабаларыбыҙҙы яңы ергә алып килеүсе лә, уларҙан таралыусы нәҫелдең этнонимына ла бүре сәбәпсе була, йәнәһе.

Саха-яҡуттар һымаҡ, башҡорттарҙың бүрене тәңре кимәленә күтәреп изгеләштереүе хаҡында фольклорыбыҙҙа мәғлүмәт юҡлыҡҡа юҡ. Әммә, тотош алғанда, әле әйтелгәндәрҙән беҙҙең бабаларыбыҙҙың да бүрене изге зат тип таныуы яҡшы аңлашыла.

Йәнә бер нисә мәғлүмәт. Төрки телле усунь ҡәбиләләрендә, төрки-уғыр ырыуҙарында бүре имеп үҫкән баланан көслө зат таралған, монголдарҙың боронғо нәҫеле инә бүренән килә имеш, тигән легендалар билдәле. Бүре-әсә, бүре-юлбашлар мотивы ингән легендалар ҡайһы бер Европа халыҡтарында ла таралған(бүре имеп үҫеүсе Рем һәм Ромул, бүрегә эйәреп, яңы ер табыусы гиприн ҡәбиләһе, төрлө ҡиәфәттәр алыуға һәләтле бүре тураһындағы герман, славян, роман телле халыҡтарҙағы легендалар). Был мотивтар, тикшеренеүселәрҙең фекеренсә, Европаға төрки һәм монгол халыҡтарынан күскән.

С.Толстов, Л.Потапов, Г.Н.Потанин, К.Насыров, Г.Карпов кеүек тикшеренеүселәрҙең хеҙмәттәренән күренеүенсә, Алтай төркиҙәрендә, төрөкмән, үзбәк, ҡаҙаҡ, якут, бүрәт һ.б. халыҡтарҙа бүрегә бәйле бик күп йола, им-томдар билдәле. Бүре ғаиләне, ырыуҙы ҡурсалаусы зат тип ҡаралыр булған. Шуға ла, сабыйҙы яман заттарҙан һаҡлар өсөн, уның сәңгелдәгенә бүренең тешен, тырнағын, ашыҡтарын аҫыр булғандар, уға "бүре" һүҙе ингән исемдәр биргәндәр. Бындайыраҡ йолалар башҡорттарҙа ла билдәле: әйбер юғалһа, бүре тарамышын өтһәң, бурҙың аяҡ-ҡулы тартыша; бүре башын тупһа йә нигеҙ аҫтына күмеү шул өйҙә йәшәүселәрҙе төрлө зәхмәттәрҙән, тел-тештән, балаһыҙлыҡтан һаҡлай; йөклө ҡатынды "бүре ауыҙы"(бүре ауыҙының тирәсен киҫеп алып, киреп киптереп) аша үткәрһәң, бала тыуыуы еңелләшә һ.б. тип ышаныр булғандар. Башҡорттарҙа Байбүре, Бүребай ише исемдәр борон йыш осрар булған. Бындай миҫалдар ҡасандыр төрки халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, бүрене тотем йәнлек тип иҫәпләүҙәре хаҡында һөйләй. Төрки-монгол халыҡтарының тотемизмы буйынса бик күп материалдарға анализ яһаған С.П.Толстовтың әйтеүенсә, күк бүре образы Урта һәм Үҙәк Азия тотемизмында иң боронғо ҡатламы иҫәпләнә икән. Әйтелгәндәр барыһы ла бүре-юлбашлар хаҡындағы башҡорт легендаһында ла бабаларыбыҙҙың тотемистик ҡараштары – бүре культына инаныуҙары сағылған, тип раҫларға нигеҙ бирә.

Бәләкәй бала-сағаны шөрләтер өсөн, башҡортта: *"Сеү, ана бапаҡ(ҡапаҡ) килә!"* – тип әйтеү ғәҙәте бар. Бактиһәң, яҡуттарға ла ят түгел имеш бындай ғәҙәт. Тик улар *"бапаҡ"* урынына: "Бө!", тулыраҡ әйткәндә: *"Айдаарыман, бө кәлиә"*, йәғни: *"Сеү, бө килә"*, – тиҙәр. Урыҫ теленә *"бө"* тигән лексик берәмекте "страшный", "ужасный" тип тәржемә итеүҙәре уның мәғәнәүи яҡтан әлеге лә баяғы башҡорттоң *"бапаҡ"* йәки *"ҡапаҡ"* тигәненә һүҙмә-һүҙ тап килеүе тураһында һөйләй торғандыр, моғайын. "Бапаҡ" һүҙенең этимологияһы, боронғо төп мәғәнәһе нисек булғандыр, уныһын бер Алла белә. Әйткәндәй, яҡуттың "бө" тигәне лә архаик күренеш имеш. Контекста ҡайҙа, ниндәй һүҙҙәр уратыуында тора, шуға ҡарап, төрлө мәғәнә алыусан бер аумаҡай лексик берәмек икән ул. Әммә ҡайҙа ҡулланылмаһын, мәғәнәһендә ҡурҡыныслыҡ төшөнсәһе ҡала. Шуға күрә лә әлеге Егорованың "бөрө" тигән һүҙ "бө" һәм "эр" тигән лексик берәмектәрҙән хасил булыуы ихтимал, тигәне менән килешкәндә лә була. Ысынлап та, башҡорттар: "Сеү, бапаҡ килә!" – тип ҡурҡытыу менән бер рәттән:

Тыңғыл-тыңғыл, бәпәйем,
Тыңғылдатып һөйәйем,
Өй артында бүре бар,
Йылтыр-йылтыр күҙе бар,
Һыйыр һауған ҡашҡа бар,
Сеүәтәнде тотоп бар,
Күбек һөҙөп бирәйем,
Аны эсеп бөтмәһәң
Күтеңә сыбыҡ бирәйем, –

тип, берсә ҡапаҡлап, берсә вәғәҙә биреп, берсә тыйып әйтә торған бала әүрәтеү һамағы ла бар. Ошо миҫал ғына ла Егорова әйткәнде ҡеүәтләгәндәй итә түгелме?

Төрки-монгол телдәрендә "бөө" (йәки "бей") тигән һүҙ борон "шаман", "рухани" тигән мәғәнәлә лә ҡулланылған. Ҡалмыҡтарҙа, мәҫәлән, шаманды *"бөө" ("бөй")* тип атап йөрөтәләр. Ғалимдарҙың уйынса, был һүҙ үҙ нәүбәтендә төркиҙәрҙә "кенәз, юлбашсы", "башлап йөрөүсе" тигән мәғәнәлә ҡулланыла торған *"бәк"*, *"бей"* тигән һүҙҙәргә тура килә. Әгәр ҙә ошо фаразда хаҡлыҡ була торған булһа, "башҡорт" этнонимының килеп сығышы хаҡындағы легендаларға тағы бер күҙ һалырға йүне сыға түгелме? Бүренән күҙ яҙҙырмай, уға эйәреп килеү һөҙөмтәһендә, үҙҙәренә яңы ил табыусы бабаларыбыҙ, "ҡорт" тигән һүҙҙе ҡыҫтырмаған сүрәттә лә, бүрене башлаусы, башлап килеүсе тип таныған булып сыға ла баһа.

Ә инде "ҡорт" тигәне ни өсөн, легенда буйынса, "башҡорт" тигән этнонимға нигеҙ булған тигәндә, уны шулай аңлатып була торғандыр: Абдулҡадир Инан әйтеүенсә, борон күп кенә ҡәүемдәрҙә бүрене үҙ әсә телендәге атама менән телгә алыу тыйылған (ул һүҙ табу хисабында булған) бит инде. Бүре-тотем исемен үҙҙәренең этнонимына ҡәүем исеменә индереп, шуның менән ошо изге затҡа хөрмәттәрен мәңгеләштереү мәсьәләһе тыуғас, бик аптырап ҡалмаған-

дар: уйғыр ҡәрҙәштәренән күрмәксе, бөжәк исеме, *ҡорт* һүҙе менән хушһынғандар ҙа ҡуйғандар (мин бында, мотлаҡ шулай булған, тип раҫларға йыйынмайым, тик мифтың логикаһынан сығып ҡына фекер йөрөтәм).

Әле әйтелгәндәр күҙлегенән ҡарағанда, “баш бүре“ атамаһына (этнонимына) тағы бер ҡағылып үтергә форсат сыға. Ни өсөн уны ла “баш ҡорт“ ҡына тип алмағандар? Сөнки, күрәһең, әҙәм заты аҡыл туплай килә, донъяға ҡараш, мифологик төшөнсәләр үҙгәрә башлаған, хатта элекке мәғәнәһен дә юғалтҡан, мәгәр бүре тигән януарҙың бик борондан изгеләштерелеүе хаҡындағы төшөнсәне генетик аң һаҡлаған. Шул ҡапма-ҡаршылыҡлы ике сәбәп арҡаһында, атаманы аңлатыусы сюжет мифологик йөкмәткеһен һаҡлаған сүрәттә лә, “бүре“ үҙ исеме менән ауыл йә этник төркөм атамаһында мәңгеләштерелгән дә ҡуйған, моғайын.

Мәсьәләгә, “*бүре*“ һүҙе “*бө*“ менән “*эр*“ тигән лексик берәмектәрҙән хасил булған тигән ҡараштан сығып күҙ һалғанда ла, “башҡорт“ тигән этнонимыбыҙҙың килеп сығышын аңлатыуҙа ҡыҙыҡлы ғына фекер тыуырға мөмкин. Шул уҡ Егорова әйткәнде ҡабатлау менән генә сикләнәм. Уның әйтеүенсә, “*бө*“ – “*ҡот алыусы*“(“устрашитель“) мәғәнәһенә эйә, ә “*эр*“ – “*илаһ, әфәнде*“ (“Господь“, “господин“) тигәндә аңлата. Икеһен бергә әйтһәң, “*илаһи ихтыярҙы үтәүсе*“ тигән мәғәнә килеп сыға. Алтай тарафтарында, Иртыш үрҙәрендә бер тирәлә ҡасандыр яҡуттарҙың бабалары менән беҙҙең ҡайһы бер ырыуҙарыбыҙҙың өймәкләшеп йәшәүен иҫәпкә алғанда, “*бүре*“ мәғәнәһенә эйә булған “*бөрө*“ һүҙенең ошо хикмәтле төшөнсәһе, моғайын да, шул ҡәүемдәрҙең барыһына ла мәғлүм булған, тип әйтә алабыҙ. Әгәр ошо фаразда хаҡлыҡ булһа, легенданың төп геройына әүерелгән “*баш ҡорт*“, “*башлап килеүсе бүре*“ тәүҙә, илаһи ихтыяр буйынса, бабаларыбыҙ алдында пәйҙә булған, тип аңлатылһа, шулай уҡ һис тә ғәжәпләнер урын юҡ.

Булғас булһын. “Бүреләр“ риүәйәтенең Кирәй Мәргәнгә Ғариф Рамазанов һөйләгән вариантында телгә алынған Ҡазан татарының һүҙенә лә саха-яҡут ерендә ишеткән концепция күҙлегенән йәнә бер әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Ул сауҙагәр биш бүре тиреһенең бәйәһенә, нәҡ бөгөнгө (мәҫәлән, Өфө баҙарҙарын биләп ала башлаған Кавказ, Ҡытай, Вьетнам тарафтарынан килгән ) алыпһатарҙарса, сифаты түбән тауар бирә. Шуға күрә лә тиреләрен һатҡан һунарсы егеттәр тегене ҡыуып етеп, тиреләрен һыпыра тартып алып ҡала. Шул саҡ, иғтибар итегеҙ, теге алыпһатар: “Әҙәм түгел икән былар! Бүреләр икән!“ – тигән, риүәйәттә әйтелеүенсә.

Өҫтән-мөҫтән генә күҙ йүгерткәндә, әллә ни нәмәһе лә юҡ кеүек был риүәйәттең. Уның менән танышҡас, бары: “Арыу иткәндәр! Афарин!“ – тип әйтергә генә ҡала, теге бүреләрҙе хуплап. Һәм шуның менән сикләнергә лә була. Ә инде теге һунарсы егеттәрҙе Ҡазан алыпһатарының бүреләргә тиңләүенә килгәндә: “Был ни – ҡәҙимге эр һүҙе генә инде“, – тип өҫтәргә лә мөмкин. Юҡ шул. “Туҡта әле, ә ниңә һуң эткә тиңәмәгән? Бүреләрҙән генә һалдырған?“ Ошондай һорауға урын ҡала ла баһаң. Уныһына: “Әле генә бүре тиреһен шуларҙан һатып алған, дөрөҫөрәге, һатып алам, тип, уларҙы төп башына ултыртҡан бит. Шул сәбәптән отоп алған тиреһе генә уйында булған да, теленән дә шул “бүре“ һүҙе ысҡынған инде“, – тип, аңһат яуап менән генә лә ҡотолорға була. Әммә алыҫтағы саха ҡәрҙәштәребеҙҙән ишеткән бер мәғлүмәт был яуаптарға бер аҙ төҙәтмә яһарға форсат бирә.

Боронғо Ҡытай сығанаҡтарында Төрки ҡағанатының аристократ сығышлы яугирҙәре, әйтеп үтелгәненсә, “бүреләр“ тип аталған. Әлеге алыпһатарҙың хәтере шул “бүреләр“ хаҡындағы төшөнсәне һаҡлағандыр ҙа, архетип законсалығы буйынса, шул һүҙ уның теленә килгәндер һәм ауыҙынан ысҡынып та киткәндер. Үҙ ихтыярынан тыш. Ни тимә, ул алыпһатарҙың да тамыры шул яҙма мәғлүмәт теркәлгән тарафтарға барып тоташыуы бик тә ихтимал. Лев Гумилевтың “Древние тюрки“ китабында бирелгән карта буйынса фекер йөрөткәндә, ихтимал ғына түгел“, “шулай булған“ тип раҫлау үҙенән-үҙе телгә килә. Сөнки ул татарҙар йәшәгән ареалды хәҙерге Монголияның төньяғына урынлаштырған.

*(Дауамы киләһе һанда)*